*Ҡайһы бер кешеләр шулай була: "Китабы күп", - тип халыҡ араһында исемен сығарыр өсөн генә китап йыя. Тик уларҙы үҙе лә файҙаланмай, башҡаларға ла бирмәй. Хатта эстәрендә ни булғанын да белмәй. Улар йөк ташыусылар кеүек. Шуның өсөн һеҙ алырға теләгән китаптарҙы үҙегеҙгә файҙа алыу өсөн һайлағыҙ.*

**РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

31 ОКТЯБРЬ - 6 НОЯБРЬ (ҠАРАСАЙ - ҠЫРПАҒАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№44 (358)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы...**

матбуғат баҫмаһына яҙылып белдерәйек



2

**Кем икәнебеҙҙе беләйек...**

ситтәргә лә танытайыҡ



6

**Араларға туғанлыҡ күпере һуҙа...**

интернеттағы Башҡорт порталы



8-9

**Вакцина әҙерләнә**



12

**ТВ программа**

14


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кредит иҫәбенә йәшәү уңайлы һәм файҙалы, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

*Мазһар ИҪӘНБАЕВ, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*

- Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙер кредит алмайынса йәшәп булмай. Мәҫәлән, миллиондары булмаған кеше бер нисек тә фатир ала алмаҫ ине бөгөн. Ипотека кредиты үҙ фатирында йәшәү мөмкинлеген бирә, тимәк, был йәштәр өсөн файҙалы. Өфө урамдары еңел автомобилдәр менән тулы, уларҙың да байтағы кредитҡа алынған. Шулай уҡ ҡиммәтлерәк көнкүреш техникаһын да кредитҡа тиҙерәк алып була. Әлбиттә, мохтажлыҡ кисереп йәшәүгә ҡарағанда, тормош өсөн кәрәкле әйберҙәрҙең файҙаһын күреп йәшәү уңайлыраҡ.

Әммә, бер яҡшыға - бер яман, тигәндәй, кредиттың әҙәм балаһын кабалаға индереүе лә бар бит әле. Кредитҡа алған әйберҙәр үтә ҡиммәткә төшә беҙҙең халыҡҡа. Кредит биреүселәр ҙә үҙ файҙаһына эшләргә тырыша, кредит ставкаһын артыҡ юғары ҡуя. Ә кеше шул талауға тиң кредит шарттарына күнергә мәжбүр, сөнки унын башҡа сараһы юҡ. Эш хаҡтары юғары булһа, кредит алыуҙан ғына хәл иткеһеҙ проблемалар килеп сыҡмаҫ ине. Ә беҙ эш хаҡы иң түбән булған илдәр рәтендә йөрөйбөҙ. Унан һуң, кредит сәйәсәте төптән уйланмай, фәнни нигеҙҙә хәл ителмәй килә әлегә. Был - дәүләт кимәлендә көйләнә торған мәсьәлә. Бына тағы ла бер миҫал. Кредитты айырым шәхестәр генә түгел, ойошмалар, төрлө юридик берәмектәр ҙә ала. Беҙҙең иҡтисадҡа һалынған сит ил инвестицияларын да кредитҡа тиңләп була. Көрсөккә тиклем ҡайһы бер республикалар шулар иҫәбенә иҡтисади хәлен яҡшыртыуға өмөтләнһә, хәҙер бик ауыр хәлдә ҡалды: сит инвесторҙар үҙҙәренә тейешле финанс сараларын кире талап итә башлағас, күп предприятиелар банкротлыҡ хәленә етте. Ғөмүмән, кредит мәсьәләһен матди тормошобоҙҙо яҡшырта барып, ошо илдә йәшәгән һәр кемдең хеҙмәтен һәм тотош ил иҡтисадын юғары килемле итә алыу аша ғына хәл итеп буласаҡ.

*Раушл ӘХМӘТОВ, уҡытыусы:*

- Бурысҡа алыу-биреү күренеше элек-электән йәшәп килә, әммә ул әүәл хәҙергесә киң таралыу тапмаған булған. Совет осоронда ла кредит булды, әммә кредит алыу һәр кемгә лә мөмкин түгел ине, шуға күрә халыҡ башлыса аҡсаһы нимәгә етә, шуға риза булып йәшәне. Ғөмүмән, ул саҡта бурыс алыу иҫәбенә көнитмешенде яҡшыртыу халыҡ менталитетына хас булманы. Ул замандарҙа дәүләт заемдары облигацияларын мәжбүри рәүештә тигәндәй таратыу, халыҡтың үҙенән арттыра алған килемен сберкасса тип аталған берҙән-бер аҡса банкында һаҡлау кешенең дәүләттән түгел, дәүләттең халыҡтан бурысҡа алып йәшәүен күрһәтә ине.

Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, баҙар иҡтисады, нигеҙҙә, кредитҡа ҡоролғас, халыҡ та шунһыҙ йәшәй алмай. Иң әүәл ваҡ эшҡыуар үҙ эшен яйға һалам, тиһә, мотлаҡ кредит алырға мәжбүр, шунһыҙ ул мандый алмаясаҡ. Шулай уҡ магазиндар селтәрен тотоусылар тауар әйләнешен туҡтатмаҫ өсөн даими рәүештә кредит алып торорға тейеш. Ә ябай кешегә килгәндә, бөгөн уға ниндәйҙер ҡиммәтлерәк тауарҙар һатып алыу өсөн тиҙ генә аҡса туплауы мөмкин түгел. Йәштәр үҙ тормоштарын автомобилһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмай, шуның өсөн уны кредитҡа алыу уларға бик уңайлы тойола. Фатир кеүек иң ҡиммәтле "баҙар тауарын" бөгөн үҙ аҡсаһына ғына һатып алыусылар бик һирәк, шуға күрә ипотека кредитына ла мохтажлыҡ ҙур. Бер яҡтан, хәҙерге йәштәр бурысҡа йәшәргә мәжбүр булһа, икенсе яҡтан, баҙар иҡтисады психологияһы кредитты кешеләр өсөн иң уңайлы һәм файҙалы күренеш сифатында күрһәтә ала. Әммә, миҙалдың да ике яғы булған кеүек, кредитҡа йәшәүҙең дә кире яҡтары бар икәнен онотторға ярамаҫ ине. Бурысҡа батҡан кеше психологик яҡтан тотороҡһоҙлоҡҡа дусар булһа, кредиттарҙы ваҡытында түләй алмаусыларҙың үтә ныҡ күбәйеүе арҡаһында бер илдең генә түгел, тотош донъяның финанс һәм иҡтисад көрсөгөнә юлығыуына беҙ үҙ тәжрибәбеҙҙә инандыҡ бит инде.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

### ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

# ҠАҺЫМ ТҮРӘ РУХЫ...

## батырҙарын йыйҙы



**Яңыраҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһында 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым түрә иҫтәлегенә милли көрәш буйынса Республика турниры үткәрелде. Уны БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы, Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте, БР Милли спорт көрәш федерацияһы ойошторҙо.**

**Физик көсө һәм етеҙлеге, батырлығы һәм ҡыйыулығы, гәйрәте һәм оҫҡор булыуы менән айырылып торған кешене электән батыр тип йөрөткән халҡым. Батырлыҡты майҙанда һынау йолаһы ла бөгөнгә көнгә тиклем онотолмаған. Был турнир ҙа ошо йоланы тергеҙеп, баҙыҡландырып ебәреүсе матур бер сараға әйләнде.**

**(Дауамы 5-се биттә).**

✓ *Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе яҡындарыбыҙға "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек, тип тәҡдим итәбеҙ. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр һәм рәхмәт уҡыр улар.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Кешенең исем-фамилияһы телдән әйтелгәндә дөрөҫ яңғырарға, яҙғанда дөрөҫ яҙылырға тейеш - был аксиома, әммә яҙмала төрлө телдәрҙең алфавит ҡанундарына ярашлы ул үҙгәртеберәк яңғырарға һәм яҙылырға мөмкин. Алфавиттарҙың үҙгәреше лә исем-фамилиялар яҙылышына мәғлүм төҙәтмәләр индереүсән.**

# ИСЕМ-ШӘРИФТӘР...
## дөрөҫ яҙылһын

Башҡорт-төрки алфавиты боронғонан хәҙергәсә килгән тарихында бер нисә тапҡыр алфавит алыштырҙы. Беҙҙең эраның тәүге мең йыллығында руник алфавит ҡулланылһа, Ислам диненә күскәндән һуң, Х быуаттан алып ғәрәп алфавиты, ХХ быуаттың егерменсе йылдарында латин алфавиты, утыҙынсы йылдар аҙағынан урыҫ алфавиты ҡулланыла. Алфавит алмаштырыу уны ныҡлы үҙләштергәнгә тиклем уҡыу-яҙыу эшендә шаҡтай ауырлыҡ һәм ҡаршылыҡтар ҙа тыуҙырғылай. Үткән яҙмаларҙы уҡыуҙы, таныуҙы ауырлаштыра. Улай ғына түгел, уҡымышлылыҡ сифаттарына кире йоғонто яһай.

Мәҫәлән, Рәсәйҙәге бөтөн мосолмандарҙың исем-фамилияһы русса яңғырашында һәм яҙылышында туған телдәге әйтелешенән һәм яҙылышынан айырыла. Бәғзе берәүҙәр үҙ исем-фамилияһының төрлө телле аудиторияла, башҡа тел кешеләре менән аралашҡанда нисек яңғырарға тейешлеген үҙе лә ҡай саҡ буташтыра башлай. Был хәл, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тел белгестәре, һүҙ оҫталары, яҙыусыларыбыҙҙың үҙҙәрендә лә күренгеләп ҡала.

Бер генә миҫал килтерәм. Танылған әҙибәбеҙ, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб апай Бейешева үҙенең исем-фамилияһын башҡортса яҙған әҫәрҙәренә лә "Зәйнәб Биишева" тип русса үҙгәрешендә яҙа торғайны. Үткән быуаттың илленсе йылдарында Зәйнәб апай Бейешева менән был хаҡта һөйләшкәнем булды. "Зәйнәб апай, фамилияғыҙҙы башҡортса әҫәрҙәрегеҙҙең башына ла "Биишева" тип, русса яҙа башланығыҙ, был хата бит", - тинем. Апай бер ҙә иҫе китмәй генә, "Биишева" тип яҙырға күнгәнмен инде, тип яуапланы.

"Бейешева" фамилияһын русса яңғырашындағы һәм яҙылышындағы "Биишева" рәүешендә яҙыу, әлбиттә, хата күренеш. Был хатаны хәҙер беҙ, яҙыусылар, ғалимдар төҙәтергә бурыслыбыҙ. Зәйнәб апайҙың яҡын туғандары - ғалим һәм яҙыусы Әкрәм Бейешев, журналист Фуат Бейешев үҙ фамилияларын, апаларынан күрмәксе, Биишев тип боҙманы бит.

Ындай хаталарҙы матбуғат, тел белгестәре, яҙыусылар төҙәтешергә, мәғәнәһеҙ хаталарҙы бөтөрөргә тейешбеҙҙер. Белемлелек, грамоталылыҡ та һаҡлауға һәм яҡлауға мохтаж һәр саҡ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.**

*ИҒТИБАР!*

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ БАРЛЫҒЫБЫҘҘЫ...
## матбуғат баҫмаһына яҙылып белдерәйек

**Туған телдәге матбуғат баҫмаһына яҙылыу милләттәштәрҙең рухи ныҡлығын да һынар, уларҙың интеллектуаль кимәлен дә билдәләр бер сара ул. "Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ" тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, ғәзиз милләттәштәр!**

### Шулай итеп...

2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара, тип хәбәр иткәйнек инде. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө икәнен дә белдергәйнек: **50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**

"Киске Өфө" үҙ уҡыусыларын иң тәүге сиратта йөкмәтке менән ылыҡтыра. Ә шулай ҙа... Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында **төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны** ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға **Дини календарь** алып та шатланыр.

### Һәм тағы...

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Бөгөн милли матбуғат баҫмаларының иң күп уҡыусылары - ауыл кешеләре булыуын, айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете уларҙың бик аҙҙарына ғына тейә икәнен иҫәпкә алып, әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе **ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә** "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек, тип тәҡдим итәбеҙ. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ, һәм рәхмәт уҡыр. Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ!



Баймаҡ почта хеҙмәткәрҙәре.

### Тағы бер тәҡдим бар...

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙе шатландыра, кәйефте күтәрә, бәхет нурына ҡойондора торған бәләкәй генә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға, эҙләргә кәрәк, тибеҙ һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Бергә йәшәйек, бергә эҙләйек бәхетле итә торған сараларҙы.

### Өфөләләргә...

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

● Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә матбуғат киоскыһында яҙылыу һеҙгә ярты йылға 270 һумға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.

● Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзаныраҡ: ярты йылға - **225 һум**.

● Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 10-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ бер йылға **373 һум 20 тингә** генә төшәсәк.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ЙӨҘӨК ҠАШЫ

Бик күп милләттәштәребеҙ яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзитен Башҡортостан матбуғатының йөҙөк ҡашы, тип әйтһәк тә һис артыҡ булмаҫ. Гәзиттең бай һәм киң мәғлүмәтле, төплө һәм тос, фәлсәфәүи фекерле булыуы уны башҡа матбуғат баҫмаларынан айырып тора. Был йәш милли баҫмабыҙ халыҡ аңын күтәреү, әхлаҡ вә динебеҙҙе тергеҙеү, йәмғиәт рухын нығытыу өлкәһендә баһалап бөткөһөҙ эштәр башҡара. Гәзиттә ниндәй генә тармаҡтар буйынса мәғлүмәт бирелмәһен, уларҙың һәр ҡайһыһында уҡыусы иғтибарын йәлеп иткән ҡыҙыҡлы фекерҙәр, файҙалы кәңәштәр, уйланырлыҡ һығымталар табып була. "Киске Өфө"лә яҙылғандарҙы уҡып, аҡыл һәм фәһем алған, дәрт-илһамдары артҡандар ҙа һирәк түгелдер. Бөгөн ошондай ысын мәғәнәһендәге халыҡсан матбуғат баҫмаһы йәш быуынға ла, урта һәм оло йәштәгеләргә лә берҙәй кәрәк. "Киске Өфө" гәзитенә ваҡытында яҙылырға үҙегеҙ ҙә онотмағыҙ, башҡаларға ла тәҡдим итегеҙ, хөрмәтле ватандаштар!

**Зилә АҘНАБАЕВА,**
**"Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең Нефтекама филиалы етәксеһе,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Мәскәүҙә Рәсәй төбәктәр үҫеше министрлығында Бөтә Рәсәй Кәңәшмәһе булып үтте. Унда һүҙ дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һәм Рәсәй төбәктәренең этномәҙәни үҫеше мәсьәләләре хаҡында барҙы. Кәңәшмә эшендә милли сәйәсәт эштәрен алып барыусы төбәктәр министрлыҡтары һәм ведомстволары етәкселәре, беҙҙән БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты. Илдус Ғөбәйҙулла улы үҙенең сығышында, милләт-ара мәсьәләләр менән яҡшылап шөғөлләнерҙәй компетентлы федераль орган булдырыу көнүҙәк мәсьәлә, тип билдәләне һәм аныҡ тәҡдимдәр индерҙе.

✓ Башҡортостанда төбәктә туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе туристик индустрия берлеге төҙөләсәк. Уның составына биш йөҙҙән ашыу туристик һәм ҡунаҡхана хужалыҡтары, шифахана-курорт ойошмалары инәсәк, тип күҙаллана.

✓ "Өфө" халыҡ-ара аэропорты ҡышҡы расписание менән эшләүгә күсте, ул 2010 йылдың 27 мартына тиклем дауам итәсәк. Көҙгө-ҡышҡы навигацияла Төркиә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Египет, Һиндостан кеүек халыҡ-ара йүнәлештәргә, шулай уҡ Рәсәй һәм БДБ илдәренә утыҙлап рейс һаҡланасаҡ. Ҡышҡы расписаниела шулай уҡ Нижнекамск, Архангельск, Пермь, Нарьян-Мар, Норильск кеүек яңы йүнәлештәр ҙә барлыҡҡа килгән.

✓ БР Хөкүмәтендә Премьер-министр урынбаҫары, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Фидус Ямалтдинов рәйеслегендә үткән кәңәшмәлә яңы тыуған балалар араһындағы үлем осраҡтары проблемалары тураһында һүҙ барҙы. Республикала дөйөм алғанда был күрһәткесте 1 мең яңы тыуған балаға 6,7-гә тиклем кәметеүгә ҡарамаҫтан, ҡайһы бер райондарҙа уртаса республика күрһәткесенән юғары булған миҫалдар ҙа бар.

✓ Волга буйы федераль округында торлаҡ төҙөлөшөнөң үҙкиммәте буйынса Башҡортостан күрһәткесе иң түбәне. Статистика буйында дәүләт комитеты мәғлүмәттәренә ҡарағанда, республикала бер квадрат метр торлаҡ төҙөү хаҡы 22581 һумға төшә. Сағыштырыу өсөн: был күрһәткестәр Татарстанда 23405 һум тәшкил итә.

✓ Байҙар, ярлылар, фәҡирҙәр - уларҙы нимә берләштерә ала? Яңы яхта алыу теләгеме, әллә айына биш мең һумды нисек итеп еткереү уйымы? Әмиллəттәр? Уларҙы ниндәй уртаҡ идея тирәләй берләштереп була?



АҘНА ШАҢДАУЫ

# РӘСӘЙ КЕМ ӨСӨН,

## йәки Халыҡтар берҙәмлеге көнөн кем менән ҡаршыларға?

**Бер түгел, ике иҫтәлекле датаны ошо көндәрҙә билдәләйбеҙ бар ил менән. Береһе үтеп тә китте инде. Исеменән үк һағыш бөркөлөп тора. Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнө. Икенсеһе - киләһе аҙнала була ғына әле. Уныһының атамаһы тантаналы яңғырай - Халыҡтар берҙәмлеге көнө.**

Хәтер көнө тип билдәләнә 30 октябрь. Ул 4 ноябрҙән айырмалы рәүештә ял көнө түгел. Кем теләй, кем ваҡыт һәм форсат таба - шунның сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алырға хаҡы бар. Бер кемгә лә тыйылмай. Теләһәң, өйөңдә иҫкә ал. Теләһәң, зыяратҡа бар. Теләһәң - һәр бер ҡалала тиерлек Золом ҡорбандары иҫтәлегенә һәйкәлдәр ҡуйылған - шунда юллан, сәскә шәлкемен хәстәрләргә генә онотма.

Халыҡтар берҙәмлеге көнө - дәүләтебеҙ байрамдарының береһе. Ул юғары статусҡа эйә.

Байрамдар, иҫтәлекле даталар буш урында булдырылмай бит инде. Был ике көндөң дә тарихтары бар. Тәүгеһенеке, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, 1937 йыл менән бер нисек тә бәйле түгел икән. Баҡтиһәң, Советтар Союзында 1974 йылдың 30 октябрендә Мордовиялағы лагерҙарҙың береһендә сәйәси тотҡондар аслыҡ иғлан иткән булған. Шуға ла Сәйәси золом ҡорбандары көнө тап ошо датаға тап килтерелгән.

Халыҡтар берҙәмлеге көнөнөң тарихы боронғораҡ. Күпкә боронғораҡ. Ул Рус дәүләтендә 1612 йылдың 4 ноябрендә булған драматик ваҡиғаларға бәйле. Тап ошо көндә Кузьма Минин менән Дмитрий Пожарский халыҡ ополчениеһын туплап, Мәскәүҙе поляк интервенттарынан азат итә. Арттарына тибеп ҡыуып сығара уларҙы. Бүтән яҡынламаҫлыҡ итеп. Был процеста беҙҙекеләр ҙә ҡатнашҡан, имеш. Булғандыр! Рәсәйҙә башҡорттар ҡатнашмаған бола бармы икән? Әйткәндәй, был көн батша Алексей Михайлович заманында уҡ дәүләт байрамы тип иғлан ителгән булған. Бынан тыш, белмәһәгеҙ - белегеҙ, 4 ноябрь - Алла Инәһенең Ҡаҙан иконаһы көнө.

Бына ошондай ҡапма-ҡаршылыҡлы ике көн. Илебеҙ тарихындағы ике иҫтәлекле дата. Араларында ни бары биш кенә тәүлек. Ә асылда - төпһөҙ упҡын. Үтерлек түгел.

Ошо урында был ике байрамды ситкәрәк ҡуйып торайыҡ та, ғөмүмән, байрамдар хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле. Уларға беҙ кире әйләнеп ҡайтырбыҙ әле. Байрам итеү кешегә борон-борондан, артҡы аяҡтарына баҫып, ҡулына таяҡ алған мәлдән хас. Тәүгеләре, әлбиттә, примитив ҡына булған. Күмәкләшеп үлтерелгән мамонт тирәләй бергәләшеп ҡысҡырышып һикергеләү, ҡул болғау, бер яҡтан, мул табыш уңайынан күңелдә тыуған ҡыуанысты белдереү булһа, икенсе яҡтан иһә ҡанды уйнатҡан һунар ҡомарын (заманса - адреналин була инде) сығарыу өсөн кәрәк булғандыр.

Ваҡыт үтеү һәм тәүтормош кешеләрендә дәүләтселек сифаттары (башлыҡ, шаман һ.б.) барлыҡҡа килеү менән байрамдарҙың мәғәнәһе арта ғына. Улар муллыҡты, иркен тормошто сағылдырыусы бер символ булып ҡына ҡалмай, иң тәүҙә кешеләр менән идара итеүҙең бер юлына әүерелә, йәғни халыҡты ҡулда тотоу өсөн кәрәк була башлай. Байрам, тимәк, мул табын, усаҡ тирәләй хәлдән тайғансы бейеүҙәр, ҡайҙалыр бейеклеккә, уба башынамы шунда, менеп ҡунаҡлаған башлыҡ, шамандың ауыҙынан яңғыраған төрлө һүҙҙәр, уның тарафынан башҡарылған йолалар һәм ритуалдар (аңлайышһыҙ, әммә ҡыҙыҡ һәм хатта бер ни тиклем ҡурҡыныс) кешенең күңелен күтәрә, башлыҡҡа һәм шаманға ышанысты арттыра. Шул заманаларҙан берәй нәмә үҙгәрҙеме? Юҡ, тиерһегеҙ. Ысынлап та, шулай. Совет заманындағы байрамдарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Әйтәйек, 7 ноябрь - Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнөн. Мавзолей башында башлыҡтар, халыҡ - аҫта. Ҡыҙыл әләмдәр елберҙәй, тауыш көсәйткестәрҙән марштар, Коммунистар партияһының байрам айҡанлы саҡырыуҙары яңғырай. Байрам алдынан ғына магазиндарға ит, май, колбаса кеүек тәм-томдар сығарыла. Кешеләрҙең тамаҡтары туҡ, күңелдәре күтәренке, йөрәктәре дәртле тибә. Байрам, йәмәғәт, байрам! Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, булды бит шундай заманалар. Ә бит Халыҡ берҙәмлеге көнө тап ошо 7 ноябрь байрамын оноттороу, кешеләр хәтеренән юйҙырыу маҡсатында ойошторолған тигән фекер ҙә йөрөмәй түгел, йөрөй.

Бөгөнгө байрамдар берҙәмлек менән бик айырылып тормай шул. Борон замандарҙа, эйе, кеше бергәләшеп һунарға йөрөгән, сөнки мамонтты яңғыҙы еңә алмаған. Коммунистар партияһы ла берҙәмлекте, партия һәм уның башлыҡтары тирәләй тупланыуҙы, бергә булыуҙы, арҡаға арҡа терәшеп бөтә донъя капитализмына ҡаршы тороуҙы алға һөрҙө. Бөгөн кемгә ҡаршы торорға, ниндәй ҡурҡыныс айҡанлы бергә тупланырға була һуң?

Үҙ дәүләте тарафынан мыҫҡыллауҙарға, йәберләүҙәргә дусар ителгән кешеләр нахаҡ яла буйынса, ә күп осраҡта бер ғәйепһеҙ 15, 20, 25 йылға лагерҙарға, һөргөнгә оҙатылған, сәйәси золом һөҙөмтәһендә яҡындарын, туғандарын, ата-әсәләрен юғалтҡандар, бар ғүмерен "халыҡ дошманы" мөһөрөн тағып йөрөргә мәжбүр булыусылар бөгөн шул уҡ дәүләттең сәйәсәтен дауам итергә маташҡандар менән берҙәм булырға теләр ине микән? Ай-һай! Дәүләттең атамаһы үҙгәреү менәнме ни? Кешеләр шул уҡ ҡалды ла баһа! Ә пенсионерҙар һуң?.. Дөрөҫөрәге, улар түгел, ә абрамовичтар пенсионерҙар менән берҙәм булырға ризамы икән? Бөгөн Рәсәй йәмғиәте социаль ҡатламдарға бүленеп бөттө бит инде. Байҙар, ярлылар, фәҡирҙәр - уларҙы нимә берләштерә ала? Яңы яхта алыу теләгеме, әллә айына биш мең һумды нисек итеп еткереү уйымы? Ә милләттәр? Уларҙы ниндәй уртаҡ идея тирәләй берләштереп була? Рәсәй бөгөн улар өсөн күберәк "үгәй әсәй" түгелме?

Әйе, Халыҡтар берҙәмлеге көнөндә бергә тупланып, ойошҡан рәүештә урамға сығыусылар юҡ түгел, бар. Бер нисә йыл рәттән Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында, шул иҫәптән баш ҡалала "Урыҫ маршы" тип аталған акция ойоштора. Унда башлыса баштары таҡыр итеп ҡырылған, күн курткалар кейгән йәштәр ҡатнаша. Күтәргән лозунгылары, яңғыратҡан орандары ябай ғына: "Рәсәй - урыҫтар өсөн!" Ә беҙ кем һуң улай булғас? Уларҙан тыш, был байрамға коммунистар ҙа сыға, ҡыҙыл әләмдәр күтәреп. Башҡа партиялар ҙа ҡоро ҡалмай. Һәр береһенең үҙ өндәүҙәре, үҙ әләмдәре, үҙ юлдары.

Золом ҡорбандары ғына өнһөҙ. Ни әйтергә тейеш һуң улар?

**Таһир ИШКИНИН.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺАБАҠТЫ...

## бесәйҙәр бирә

**Яңыраҡ матбуғат баҫмаларының береһендә бер мәҡәләгә юлыҡтым. Автор һуңғы йылдарҙа балаларынан баш тартыусы әсәләр һанының артыуы тураһында яҙа, шуға бәйле сәбәптәрҙе тикшерә, йоғонто яһаусы факторҙарҙы асыҡлай. Анкета яуаптарынан балаһынан баш тартыусының социаль портреты төҙөлә, артабан һандар, һандар, һандар...**

Бынан биш-алты йыл элек, ул ваҡытта әле БДУ-ның беренсе курсын тамамлаған саҡ, сессияны тамамлап, өләсәйҙәргә бесән эшләшергә ауылға барҙыҡ. Сәй артында һөйләшеп ултырғанда өләсәй һүҙ ыңғайында ғына этенең көсөкләүе, бесәйенең дә аҙна элек кенә көсөкләп тә, балалары үле тыуыуы тураһында һөйләне. Кисен көтөү ҡайтып, һыйырҙарҙы һауып, өйгә инеп барғанда көсөктәрҙең йәлләткес сыйылдашҡан тауышы ҡолаҡҡа салынды. Аптырап киттек, вайымһыҙлыҡта ғәйепләп, әрләй-әрләй, этебеҙҙе эҙләргә тотондоҡ. Күп тә үтмәне, тыҡрыҡ буйында үле килеш таптыҡ уны - кемдер ағыу ашатҡан. Бигерәк уҫал ине шул.

Күҙҙәре лә асылмаған етем көсөктәрҙең ауыҙына һыйыр һөтө тамыҙып ҡарайбыҙ - эсә белмәйҙәр. Асығып сыйылдашыуҙарына йөрәк өҙөлә, тик ярҙам итер сара юҡ. Шулай тағы бер көн үтте. Астан үлерҙәр инде, тип торғанда көтөлмәгән хәл булды. Ҡапыл шымып ҡалған көсөктәрҙе, үлгәндәрҙер инде, тип барып ҡараһаҡ... Күҙҙәр маңлайға менде - көсөктәрҙе бесәйебеҙ имеҙеп ята!

Беҙ, ғәҙәттә, бер-береһе менән уртаҡ һүҙгә килә алмаған, һәр ваҡыт талашырға сәбәбен табып ҡына торған кешеләр тураһында "эт менән бесәй шикелле", тибеҙ. Был сағыштырыу тормоштан алынған, бихисап күҙәтеүҙәр менән нығытылған да кеүек: эттәр бесәйҙәр артынан ҡыуа, бесәйҙәр эттәрҙе күреү менән арҡаһын дуғаландырып, ыҫылдай, сапсып ҡалырға самалай. Юҡ икән шул! Тәбиғәт ҡанундары буйынса, әсәлек хисе, әсәлек тойғоһо бөтә күренештәрҙән дә юғарыраҡ икән (хатта хайуандар донъяһында!). Беҙҙең бесәй ҙә эт көсөктәрен имеҙҙе, улай ғына ла түгел, беҙ яҡынлай башлаһаҡ, үҙ балаларын һаҡлағандай, ыҫылдап ҡурсаланы. Тора-бара, үҫә төшкәс, көсөктәр үткер тештәре, осло тырнаҡтары менән бесәйҙең эсен сапсып, тешләп, ҡанатып бөттө. Ауыртыуға түҙмәй, ҡысҡырып, ҡанһырап ятһа ла, бесәй көсөктәрҙе ташламаны...

Йә, Хоҙай, хайуандар кешегә ниндәй һабаҡ бирә! Хайуандар ситтәрҙең балаһын шулай ҡурсылай, үҙ балаһылай күреп хәстәрләй белә. Ә кеше... Йәнеңде бүлеп, бауырыңды телеп тыуҙырған баланды ситтәр ҡулына ҡалдырырға нисек йөрәгең етер?! Кешеләрҙең кешелеклелек сифаты тураһында һүҙ алып барғанда, ысынлап та, уйланырлыҡ урын бар шул...

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ГОСТ ИСО 9001-2008 талаптарына яуап биргән сертификатҡа эйә булды. Был документ вуздың сифат менеджменты системаһының ошо юғары талаптарға ярашлы икәнен иҫбатлай. Университет Рәсәй юғары уҡыу йорттары арһында Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып ошо уңышҡа өлгәште, абруйын һәм бәҫен күтәрҙе. Бынан тыш, БДПУ башҡа мәғариф учреждениеларына сертификат биреү буйынса аңлатыу эштәре алып барыу хоҡуғына ла эйә.

✓ Ноябрҙә Өфөлә йырсыларҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Асыҡ республика конкурсы үтәсәк. 18-35 йәшлек йырсылар 16-19 ноябрҙә Башҡорт дәүләт филармонияһында конкурс тыңлауҙарында ҡатнаша, 19 ноябрҙә иһә филармонияның Орган залында конкурста еңеүселәрҙең Гала-концерты буласаҡ.

✓ Үткән аҙнала БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия идаралығы Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында һәм Мәләүез районында Матбуғат байрамы ойошторҙо. Ошондай уҡ сара ноябрҙә Бәләбәй, Сибай, Белорет, Нефтекама ҡалаларында һәм Дыуан районы Мәсәғүт ауылында һәр береһенә яҡын-тирә районларҙы ла йыйып үткәреләсәк.

✓ Быйылғы "Һылыуҡай" конкурсында беренсе урын яулаған Сибай ҡыҙы Гөлсөм Айытҡолова Мәскәүҙәге "Мода аҙналығы"нда сығыш яһап, Рәсәйҙең иң яҡшы ун моделе исемлегенә инде, Валентин Юдашкиндың мода йорто моделе булып китте. Гөлсөм әле Өфө авиация техник университетының һуңғы курсында уҡый.

✓ Башҡортостанда 90 мең кешенең күҙ катарактаһы арҡаһында күреү һәләте түбәнәйә. Бер аҙна эсендә Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында 200 кешегә яһалма күҙ яҫмығы ҡуйыу операцияһы эшләнә. Мотлаҡ медицина страховкаһы фонды һәм институт араһында төҙөлгән килешеүгә ярашлы, бынан ары 4 мең һум торған сит ил линзалары өсөн сығымдарҙы ошо фонд ҡаплаясаҡ, катаракта сиренә дусар булғандарға операция бушлай эшләнәсәк.

✓ *Илдең, милләттең киләсәген күргегеҙ килһә, уның йәштәренә көҙ һалығыҙ, тигән бер аҡыл эйәһе. Республикала йәш быуынға һәләттәрен үстерергә мөмкинлектәр бирелә икән, һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәйәсәк.*



ХОККЕЙ

# АЛТЫ ЕҢЕУ

● Санкт-Петербургтың армия спорт клубы (СКА) һәм "Салауат Юлаев" командаларының был матчы КХЛ чемпионатында үҙәк һәм принципиаль уйын булды. Сөнки унда икенсе урындың яҙмышы хәл ителде. Юлаевсылар еңһә, улар икенсе урынға күтәрелә, ә "СКА" өсөнсө урынға сигенә. Осрашыу "СКА" хоккейсылары өсөн уңышлы башланды. Армеец Алексей Яшин беренсе булып иҫәп асты. Бары тик беренсе осор аҙағында ғына Александр Пережогин иҫәпте тигеҙләй алды: 1:1.

Икенсе осор башланып, әллә ни күп ваҡыт үтмәне, "СКА" йәнә алға сыҡты. Бынан һуң сәмләнгән юлаевсылар уйынды ҡыҙыулата төштө һәм Андрей Таратухин майҙан хужалары ҡапҡаһына 2-се шайбаны сәпәне, ә артабан Александр Радулов армеецтар ҡапҡаһы артында өсөнсө тапҡыр ҡыҙыл ут тоҡандырҙы.

Өсөнсө осорҙа А.Королюк иҫәпте тигеҙләне. Кемдең еңәсәге ҙур һорау аҫтында ҡалды, уйынды тағы ла көсөргәнешле итте. Әммә юлаевсылар һаҡсыһы Олег Твердовский бер-бер артлы ике шайба индереп, осрашыуҙы "Салауат Юлаев" файҙаһына тамамланы. Еңеүле иҫәп: 5:3.

● Мәскәү өлкәһенең Мытищи ҡалаһының "Атлант" командаһы менән "Салауат Юлаев" хоккейсылары араһында көс һынашыу һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс була. Был юлы юлаевсылар матчтың беренсе осоронда уҡ өҫтөнлөк алды. Игорь Григоренко һуҡҡан шайбаны майҙан хужалары ҡапҡасыһы үҙе һаҡлаған ҡапҡанан алырға мәжбүр булды. Икенсе осорҙа ҡунаҡтар уйын яҙмышын тулыһынса үҙ ҡулына алды. Тәүҙә Кирилл Кольцов һуҡҡан шайбаны дөгәүсәләр ҡапҡасыһы аңғармай ҡалды. Күп тә үтмәй, Андрей Таратухин йәнә ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Тынғыһыҙ Александров һуҡҡан шайбаны кире ҡағыу мөмкин түгел ине. Һуңғы осорҙа Алексей Медведев һәм Патрик Торесен ҡаршы яҡ ҡапҡаға индерелгән шайбалар һанын бишкә һәм алтыға еткерҙе. "Атлант" хоккейсылары ҡунаҡтарға бер нисек тә ҡаршы тора алманы. Хатта иң мәргән уйынсылары С.Мозякин ҡунаҡтар ҡапҡаһын аса алманы. 6:0 иҫәбе менән бик ныҡ еңелеүҙән һуң "Атлант" командаһының баш тренеры А.А.Конорейкин эштән китеүе хаҡында белдерергә мәжбүр булды.

● Шаршамбы көн "Салауат Юлаев" командаһы Череповец ҡалаһының "Северсталь" хоккейсылары менән көс һынашты. Майҙан хужалары ни бары беренсе осорҙа ғына ҡунаҡтарға бер ни тиклем ҡаршы тора алды, улар үҙ ҡапҡаларына бер генә шайба үткәрҙе. Икенсе һәм өсөнсө осорҙа юлаевсыларға ҡаршы тороу мөмкин түгел ине. Улар әленән-әле көслө һөжүм итте. Икенсе осорҙа Александр Радулов менән Дмитрий Калинин икенсе һәм өсөнсө шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына сәпәне. Өсөнсө осорҙа ҡунаҡтар иҫәпте 7-гә еткерҙеләр. Сергей Зиновьев, Патрик Торесен (2 гол) һәм йәнә Дмитрий Калинин үҙҙәренең мәргәнлектәрен күрһәтте. "Северсталь" командаһы үҙ майҙанында 7:1 иҫәбе менән отолдо. Был юлаевсыларҙың бер ыңғайҙа 6-сы еңеүе булды. Улар матчтан матчҡа уйынды көсәйтә барҙылар. "СКА" - 5:3, "Атлант" - 6:1, "Северсталь" - 7:1 иҫәбе менән еңелде.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

**Баш ҡаланың урта, махсуслашҡан музыка һәм һынлы сәнғәт мәктәптәре уҡыусыларына Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы премиялары тапшырылды. Уҡыу, мәҙәниәт, сәнғәт, спорт буйынса уңыштарға өлгәшкән 50-гә яҡын уҡыусы стипендианттар исемлегенә инде.**

…ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺӘЛӘТЛЕЛӘР…

## ситкә китмәһен



Балаларҙың һәләттәрен бәләкәй саҡта уҡ асып, уны үҫтерә белеү мөһим. Донъя кимәлендәге ғалимдарыбыҙ, төрлө өлкәлә юғары бейеклектәргә өлгәшкән шәхестәребеҙ ошоға дәлил. Ләкин һәләтте аса белеү - бер, ә уны тыуған ил өсөн кәрәк юҫыкта йүнәлтеү ҡатмарлыраҡ мәсьәлә. Һуңғы ике тиҫтә йылда асыштарын икенсе илдәрҙә эшләгән, спорт, мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә уңыштарға икенсе ил граждандары булараҡ өлгәшкән яҡташтарыбыҙ әҙме ни? Сиктәр асылғас, "мейеләр ҙә ситкә аҡты". Иң яҡшыларҙың, тыуған илендә урын тапмай, икенсе ил байрағын күтәреүе, заман һынауҙарына ҡаршы тора алмай, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүе, фәнде, мәҙәниәтте, сәнғәтте икенсе төр һөнәргә алыштырыуы арҡаһында был өлкәләрҙә ҙур бушлыҡ хасил булды. Мәҫәлән, фәндәге юғалтыуҙарҙы Рәсәй бөгөн, юғары уҡыу йорттарының ғалимдар контингенты "карттар йортона" әйләнгәс кенә, ныҡлап аңланы.

Һәләтле балаларҙы бүләкләү тантанаһында ошолар хаҡында ла уйланырға тура килде. Һуңғы йылдарҙа, әлбиттә, хәлдәр яҡшыра бара. 2009 йыл республикала - Йәштәр инициативаларына ярҙам итеү һәм үҫтереү йылы, Рәсәйҙә Йәштәр йылы, тип иғлан ителде. Дәүләт сәйәсәте лә яйлап йәштәргә табан йөҙ борҙо.

Стипендияға килгәндә, шуны билдәләп үтеү кәрәктер. Стипендия, тәү сиратта, дәүләткә кәрәк. Дәүләт үҙенә кадрҙар әҙерләй. Ни тиклем кадрҙар профессиональерәк, шул тиклем дәүләттең абруйы юғары, сәйәси, иҡтисади, мәҙәниәт һәм спорт өлкәһендәге күрһәткестәре лә яҡшыраҡ. Башланғыс этапта стипендия - стимул. Тик икенсе нәмә хаҡында ла онотторға ярамай. Бөгөн был балалар фән, спорт, мәҙәниәт, сәнғәт менән ҡыҙыҡ һәм һәләттәре булған өсөн шөғөлләнә. Бер көн улар алдында, ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ кәрәкме һәм кемгә кәрәк, тигән һорау килеп тыуасаҡ. Ошо мәлдә күҙҙән ысҡындырмау мөһим. Уларҙың бәләкәй асыштары, фәндә эшләгән тәүге аҙымдары тыуған иленә кәрәк, илдең киләсәге улар ҡулында икәнлекте ваҡытында аңлатып өлгөрөү мөһим. Дәүләт уларға битараф түгел һәм улар, һәләтле йәштәр, килтерәсәк яңылыҡтарҙы көтә. Әммә быны эшләр өсөн дәүләт тә үҙенең үҫеп килгән быуынға мохтаж икәнен аңларға тейеш. Юҡһа, йәш һәләттәрҙе юғалтырға мөмкин. Ә әүҙем, прогрессив ҡарашлы йәштәре булмаған дәүләт уңышһыҙлыҡҡа тарыуға яҡын.

Илдең, милләттең киләсәген күргегеҙ килһә, уның йәштәренә көҙ һалығыҙ, тигән бер аҡыл эйәһе. Республикала йәш быуынға һәләттәрен үҫтерергә мөмкинлектәр бирелә икән, һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәйәсәк. Быны бит, әле стипендия алыусылар ҙа, йәш быуынына ҡарамаҫтан, Рәсәй, донъя кимәлендә уңыштарға өлгәшергә өлгөргән. Яңы идеялар менән ҡайнаған, яңы проекттар эшләү юлындалар. Потенциал бар, тимәк. Ошо потенциалды дөрөҫ итеп, дәүләт, йәмғиәт һәм һәр кеше мәнфәғәтендә ҡулланырға ғына ҡала.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ УРАМ ИСЕМДӘРЕ…

## яңы спорт майҙансығы

**➔БР буйынса РФ Пенсия фонды идаралығына әсәлек капиталы сараларынан 12 мең һум күләмендәге бер тапҡыр түләнә торған аҡсаны алыу өсөн 50 мең кеше ғариза яҙған, түләүҙәрҙең дөйөм суммаһы 600 млн. һум тәшкил иткән.**

Идара хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, дәүләт сертификатына эйә булыусыларҙың 4142-һе был аҡсаларҙы торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү (ипотека кредиттарын да иҫәпкә алып) өсөн алынған кредит һәм займдарҙы ҡаплау өсөн күсереүҙе һораған. 3756 ғариза ыңғай хәл ителгән.

**➔Өфөлә 94-се лицей янында 800 квадрат метрлы күп функциялы яңы спорт майҙансығы асылды.**

Бында баскетбол, волейбол, мини-футбол һәм тағы ла 10-ға яҡын спорт төрө менән шөғөлләнеп, сәләмәтлекте нығытыу өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Майҙансыҡ ҡапланған махсус япма бик йомшаҡ һәм ҡолаған саҡта йәрәхәт алыуҙан һаҡлай. Ошо уҡ көндә бында тәүге ярыш: мини-футбол буйынса Совет районы үсмерҙәр клубтары араһында финал уйыны үтте.

**➔Өфө ҡала округы Советы депутаттары ҡарарына ярашлы, баш ҡаланың дүрт яңы урамы исемле булды.**

Ленин районының Сафроновский микрорайонында төҙөлгән өс урамға Динис Бүләков, Коралло-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы Марат Ғәзизов баш ҡалала гәзит-журналдарға яҙылыу барышы тураһында мәғлүмәт менән сығыш яһаны. Билдәләнелеүенсә, Өфөлә гәзит-журналдарға яҙылыу барышы бик уҡ ҡәнәғәтләнерлек түгел, планға ҡарата 27,27 процент ҡына тәшкил итә.

✓ Уйын бизнесы һаман да Өфө сиктәрен ташлап китә алмай. Улар лотерея клубы тигән исем аҫтына йәшеренеп, үҙ эшен дауам итә. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә был хаҡта тағы ла һүҙ күтәрелде. Билдәләнелеүенсә, уйын бизнесы менән көрәштең ауырлығы шунда: ҡала властары бер уйын салонын ябыу тураһында ҡарар ҡабул итеп өлгөрмәй, ҡаланың икенсе башында уның икенсеһе асыла. Һуңғы аҙнала ғына ун бер уйын салоны асылған һәм бөгөн ул баш ҡала утыҙға еткән. Павел Ҡачкаев хоҡуҡ һаҡлау органдарын Федераль законды боҙоусылар менән нығышмалы көрәшергә саҡырҙы.

✓ V "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленә 500-ләп эш ҡабул ителде лә инде. Сараның йомғаҡлау өлөшө 13 ноябрҙә Пионерҙар һарайында үтәсәк.

✓ Финанс көрсөгөнә ҡарамаҫтан, Өфөлә күсемһеҙ милек менән алыш-биреш дауам итә. Былтыр Федераль теркәү хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығына күсемһеҙ мөлкәткә хоҡуҡты дәүләт теркәүенә 144 мендән ашыу ғариза бирелһә, быйыл ошо осорға үндай ғаризалар 152 мең тәшкил иткән. Идаралыҡ бүлектәренә көн дә 6 меңләп кеше мөрәжәғәт итә. Шуға ла хәҙер Өфөлә документтар тапшырыуға телефон һәм интернет аша алдан яҙылып була, бынан тыш, документ ҡабул итеүсе өҫтәмә дүрт пункт асылған. Хәҙер документтар Идаралыҡтың үҙәк офисында шәмбе көндәрендә лә иртәнге 9 сәғәттән 17 сәғәткә тиклем ҡабул ителә.

✓ Был аҙнала көҙгө йәрминкәләрҙең һуңғыһы ойоштороласаҡ. Үткән ял көндәрендә баш ҡалаға 50 районҙан 1200 автомашина ауыл хужалығы рыҙыҡтары алып килгәйне. Был юлы ла йәрминкәләрҙең йәнле үтеүе көтөлә. Ә ит һатыу буйынса йәрминкәләр 12 декабрҙә башланып, Яңы йылға саҡлы дауам итәсәк.

*✓ "Милли көрәш менән бөтәһе лә шөғөлләнә алмай, быңың өсөн башҡорт булып тыуыу кәрәк", - тигәйне БДУ-ның Сибай институтында белем алыусы Йылайыр егете Айҙар Байсурин.*

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҠАҺЫМ ТҮРӘ РУХЫ...

## батырҙарын йыйҙы

**(Башы 1-се биттә).**

### “Любезные мои...”

Халҡыбыҙҙың бөйөк полководецы Ҡаһым түрә иҫтәлегенә арналған Республика турниры уның тыуған еһендә - Стәрлетамаҡ физик культура техникумы һәм институты базаһында уҙғарылды. Батырҙың тыуған ауылы Айыусыла ҡуйылған стелаға сәскәләр һалыуҙан башланған сара республиканың спорт тормошонда ҙур байрамға әүерелде һәм көндән-көн киң билдәлелек яулай барған был спорт төрө үҙенең бәйге ҡорона сәләмәт һәм маҡсатлы йәштәрҙе йыйҙы. Ойоштороусылар әйтеүенсә, турнир йолаға әйләнеп, йыл һайын ошо төбәктә - ҡунаҡсыл Юрматы ерендә үтәсәк.

Башҡорттар араһынан беренселәрҙән булып Петербург хәрби академияһында белем алған, 1812 йылғы Ватан һуғышы һәм 1813-1814 йылдарҙағы рус армияһының сит ерҙәргә походтарында ҡатнашҡан, 22 йәшендә полковник дәрәжәһенә эйә булған Ҡаһым түрәнең һуғышсан рухы был көндә һәр бәйгесенең йөрәгендә осҡондар уятмай ҡалмағандыр. Фельдмаршал Кутузовтың: "Любезные вы мои башкирцы, молодцы!" - тигән маҡтау һүҙҙәре лә ҡолаҡты иркәләп тик торҙо һымаҡ. Кеше үҙ халҡының тарихын белергә тейеш, Ҡаһым түрә кеүек батыр ир-азаматтар һаҡлап яуға күтәрелгән еребеҙ бар, ә еребеҙ бар саҡта, батырҙарыбыҙ ҙа буласаҡ - быныһына тап ошо бәйгелә шаһит булдыҡ та инде.




### Стәрлетамаҡтар һынатманы

Турнирҙа Ауырғазы, Федоровка, Миәкә, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш районлары, Өфө, Сибай, Салауат ҡалаларынан 50-гә яҡын көрәшсе ҡатнашты. Стәрлетамаҡ ҡалаһының данын бер нисә уҡыу йорто: Стәрлетамаҡ лицей-интернаты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы, Стәрлетамаҡ физик культура институты, физик культура техникумы егеттәре яҡланы һәм стәрлетамаҡ көрәш мәктәбе республикала иң көслөләрҙең береһе икәнен тағы бер тапҡыр иҫбатланы. Һуңғы ике йыл эсендә Башҡортостандың ғына түгел, Рәсәй, БДБ чемпиондары әҙерләүгә өлгәшкән тренерҙарҙың береһе, ирекле көрәш буйынса СССР-ҙың спорт мастеры Кәлимулла Хисмәтуллин Рәсәй йыйылма командаһы өсөн дә спортсылар әҙерләүҙәре, тәрбиәләнеүселәре Илгиз Ғафаров, Марат Зарипов, Илнар Лоҡманов, Илдар Моратов, Нургиз Мөхәмәтйәров һәм башҡалар тураһында ғорурланып һөйләй. Уның әйтеүе буйынса, классик көрәштең нигеҙендә лә милли көрәш ята. Бөгөнгө көндә модаға инеп киткән дзюдо, айкидо, тхеквондо, самбо, каратэ һ.б. ҡарағанда милли көрәш менән шөғөлләнеү күпкә ҡыйыныраҡ, сөнки унда үҙеңдең ауырлығыңдағы кешене күтәреп, уның аяғын иҙәндән 5-10 см күтәреп, ырғытырға тейешһең. Быының өсөн көс һәм таһыллыҡ ҡына түгел, оло тәжрибә лә кәрәк. Батырҙы яу тыуҙыра йәки батырҙы көрәш өйрәтә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр инде, бындай турнирҙар ни тиклем күберәк үткәрелһә, батырҙарыбыҙҙың һаны ла күбәйәсәк, урамда һыра эсеп, тәмәке тартып, бушты бушҡа ауҙарып йөрөүсе йәштәребеҙ ҙә булмаясаҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ: көрәш менән йышыраҡ ауылда тыуып үҫкән башҡорт егеттәре шөғөлләнә. "Милли көрәш менән бөтәһе лә шөғөлләнә алмай, быңың өсөн башҡорт булып тыуыу кәрәк", - тигәйне БДУ-ның Сибай институтында белем алыусы Йылайыр егете Айҙар Байсурин да. Тимәк, милли көрәш үҫешһен тиһәк, иң тәүҙә ауылдарҙа шарттар булдырырға кәрәк, ә үҙенең тыуған яғына тренер булып ҡайтырға теләүселәр табылыр ине.

Республика турниры ауылдарҙа зона ярыштары һәм Ҡаҙан ҡалаһында үткән билбаулы көрәш буйынса Халыҡ-ара турнир менән тап килгәйне. Һуңғараҡ Ҡаҙандан Ринат Еникеев, Альберт Рәхмәтуллин, Наил Мөхәмәтйәров, Сергей Потанин, Юнир Ильясов, Рәдиф Аҡсуриндан торған Башҡортостан командаһының беренсе урын яулап ҡайтыуы билдәле булды. Даны берәүҙеке булһа ла, батыры уртаҡ була, был да республикабыҙ көрәшселәренең төшөп ҡалғандар рәтенән түгел икәнлегенә ишара.

### Көрәшкә ярҙам кәрәк

Был спорт сараһының 2008-2012 йылдарға иҫәпләнгән милли көрәште үҫтереү буйынса Президент программаһы сиктәрендә уҙыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып үтергә кәрәк, сөнки был программа ҡабул ителгәндән һуң республика ҡала-ауылдарында милли көрәшкә иғтибар, әҙ булһа ла, арта. Һуңғы осорҙа күп һөйләнелгән оптималләштереү шарттарында артабан нимә булыры билдәһеҙ, әммә шуныһы бәхәсһеҙ: республика етәкселеге милли көрәште үҙ ҡанаты аҫтына алған икән, был өлкәлә ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр буласаҡ әле. Милли көрәш буйынса спорт мастеры, бер нисә тапҡыр Башҡортостан чемпионы, оҙайлы йылдар тренер булып эшләүсе Фәнис Ураҙбахтин әйтеүенсә, Өфө кеүек миллионлы ҡалала үҫмерҙәрҙе көрәшергә өйрәтеүсе бер генә тренер эшләгән ваҡыттар булған, ә хәҙер уларҙың һаны күпкә артҡан. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына баш ҡаланың 90-сы мәктәп базаһында милли көрәш секцияһы асылған, теләүселәр унда дүшәмбе, шаршамбы, йома көндәрендә киске 5-тән барып яҙыла ала.

Бындай үҙгәрештәрҙең барлыҡҡа килеүендә, Фәнис Харрас улының фекеренсә, БР Милли көрәш федерацияһының да роле ҙур. Ошондай бәйгеләр үткәреү бер, еңеүселәрҙе лайыҡлы итеп баһалау ҙа мөһим бит әле. Был юлы бүләктәрҙе БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы һәм Милли көрәш федерацияһы хәстәрләгән. Һәм тағы ла. Турнирҙың Ҡаҙанда үткән "Рәсәй - спорт державаһы" тип аталған беренсе форум менән тап килеүендә лә ниндәйҙер мәғәнә бар кеүек. Ил етәкселеге спортҡа йөҙө менән боролоп, тик сәләмәт тәндә генә сәләмәт рух була алыуына баҫым яһай икән, республикала ла спортҡа, шул иҫәптән милли көрәшкә лә иғтибарҙы тағы ла көсәйтеү мөмкинлеге тыуасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**65 кг-ға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Рушан Ильясов, Фәнил Ғәлимов, Альберт Хәмитов 1-се, 2-се, 3-сө урындарҙы яулаһа, 75 кг-ға тиклемге ауырлыҡта Илдар Килмөхәмәтов, Илнар Лоҡманов, Вадим Зөлҡәрнәев; 85 кг-ға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Илсур Ғибәҙуллин, Нургиз Мөхәмәтйәров, Азат Ғәзизов; 100 кг-лыҡ ауырлыҡ категорияһында Илдар Моратов, Мансур Юлтимуров, Алмаз Рәхимов; 100 кг-дан ашыуыраҡ ауырлыҡ категорияһында Роберт Исмәғилев, Ринат Әлмөхәмәтов ошо уҡ урындарҙы алды. Ҡаһым түрә иҫтәлегенә милли көрәш буйынса Республика турнирының абсолют чемпионы исеменә Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы студенты Илдар Моратов лайыҡ булды. Уға Юрматы ырыуы ҡор башы Риф Иҫәнов ҡамсат бүрек һәм елән кейҙерҙе. "Киске Өфө" гәзите "Ихтыяр көсө өсөн" тип аталған махсус призын Сибай ҡалаһынан Барый Минлебаевҡа тапшырҙы.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

вый һәм Встречный тыҡрығы, ә Октябрь районының Нагаево ауылындағы яңы бульварҙы Эске эштәр хеҙмәте генерал-лейтенанты Әнәс Хәсәнов иҫтәлегенә Хәсәнов бульвары тип атап йөрөтәсәкбеҙ. Ҡала Советы округы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин әйтеүенсә, билдәле яҡташтарыбыҙ исемен мәңгеләштереү буйынса бындай эштәр киләсәктә лә дауам итәсәк.

**➔1 декабрҙән Өфөлә электр транспортына хаҡтар артасаҡ.**

Яңы тарифҡа ярашлы, трамвайҙа йәки троллейбуста бер тапҡыр йөрөү хәҙер 9 һум, пластик карта буйынса 8 һум торасаҡ, багаж өсөн 6 һум түләргә тура киләсәк. Ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Ирек Ялалов белдереүенсә, хаҡтар күтәреү электр транспорты эшен яҡшыртыу маҡсатында эшләнә. Бөгөнгө көнгә Өфөлә бындай транспорт төрөндә йөрөү хаҡы сағыштырмаса түбән иҫәпләнә, мәҫәлән, Ырымбур, Пенза, Ульяновскийҙа 8 һум булһа, Ҡаҙанда - 10, Һамар һәм Пермдә 12 һум тора.

Льготаға эйә булыусы граждандар категорияһы өсөн махсус хаҡтар ҡаралған. 2010 йылдың 1 ғинуарынан социаль пластик карта буйынса пенсионерҙар, федераль һәм төбәк льготаларына эйә булыусылар - 3, студенттар 5 һум түләп йөрөйәсәк. 2010 йылдың 1 сентябренән мәктәп уҡыусыларына бер тапҡыр электр транспортында йөрөү 2 һумға төшәсәк. Мәктәпкәсә йәштәге балалар һәм махсус льготаларға эйә булыусылар элеккесә бушлай йөрөй ала.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Бал

Яман шеш барлыҡҡа килмәһен йәки табиптар дауалағандан һуң бәләкәйләнеп ҡалған шештәрҙе бөтөрөү өсөн: ҡайын япрағы, юл үләне, һары мәтрүшкә үләндәре өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойғандан һуң, 15-20 минут томалап тотҡас, 1 балғалаҡ бал ҡушып, көнө буйы эсергә. Көнөнә 3 тапҡыр эсергә лә була. Дауалауҙы 10 көн дауам итҡәс, 20 көн ял итергә, шеш бөткәнсе тағы ҡабатларға.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙа миома булғанда, боровая матка һәм ҡырҡъяпраҡ (кровохлебка) үләндәрен бер тигеҙ алып, 1 ҡалаҡ ошо ҡатышмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт урап тотҡас, һөҙөргә. 1 балғалаҡ бал ҡушҡас, көнөнә 1-әр ҡалаҡлап, 3 тапҡыр эсергә. Миоманан тағы бер дауа: 1 ҡалаҡ ҡырҡъяпраҡ тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, ярты сәғәт талғын ғына утта ҡайнатҡандан һуң, һыуытып һөҙөргә лә, көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

Кемдәр ябығырға теләй, киске ашҡа 1 кг ҡабаҡты, 1 татлы боросто турап, 2 ҡалаҡ һыу һалып, табала 10 минут быҡтырғас, 400 г алма турарға һәм тағы 3-5 минут быҡтырырға. Саҡ ҡына тоҙ, 1 ҡалаҡ үҫемлек майы өҫтәп, ашарға һәм күпме теләйһең, шунса шыйыҡса эсергә. Бында ике кешенең өлөшө, йәшелсәләрҙе үҙегеҙ теләгән күләмдә ала алаһығыҙ. Туймағанда, күберәк ашағандан да зыян юҡ.

Балды косметик маскаларға ла ҡушалар. 1 ҡалаҡ балға 1 ҡалаҡ лимон һуты, 1 йомортҡаның ағы, 1 ҡалаҡ быуҙа тотолған һоло онтағын ҡушып, 20-30 минут тоторға һәм биткә һыларға. 1 ҡалаҡ ҡыяр һутына 1 ҡалаҡ бал ҡушығыҙ һәм битегеҙгә һөртөгөҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Бер ҡатлылыҡ бурлыҡтан яман, бер ҡатлы, ябай булмаһаҡ ине. Әле бөтә донъяла глобалләшеү бара, башҡорт йәштәренә лә үҙ донъяһына бикләнеп йәшәргә, үҙ түңәрәгендә генә әйләнергә ярамай.*






# ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Мәктәп

• Белем алыу матур эш булһа ла, боҙоҡ ниәт менән уҡығанда матурлығы кәмей. Шуның өсөн: "Беҙҙән Аллаһы Тәғәлә риза булһын һәм яҡшы эштәргә сәбәп булһын ине", - тип ниәт итегеҙ. Был яҡшы ниәт. "Имам, мәзин, ҡазый, мөғәллим, мөдәррис йәки ниндәй булһа ла бер мәртәбәгә ирештерһәң ине", - тип ниәт итмәгеҙ. Күңелегеҙҙә бындай әйберҙәр булһа, сығарығыҙ. Сөнки былар яҡшы ниәт түгел. Белемдең маҡсаты дәрәжәлә түгел, ә файҙалы кеше булыуҙа.

• Хазинағыҙҙа булған белемдән артығын дәғүә итмәгеҙ. Үҙегеҙгә ололоҡ менән хөкөм итмәгеҙ. Күрмәйһегеҙме, бойҙайҙары күп һәм эре башаҡтар һәр ваҡыт баштарын түбән эйеп тора. Бойҙайһыҙ йәки аҙ бөртөклө башаҡтар баштарын юғары күтәрә. Аҙ ғына һауа һалҡынайһа, һелкенә башлайҙар. Хәлбүки: утҡа яндырыуҙан башҡа файҙалары юҡ.

## Китап һәм уҡыу

• Матур китаптар - ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк күҙгә, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһөҙлөктә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә. Шуның өсөн китап алдында һаранланмағыҙ. Китаптарҙан айырылмағыҙ.

• Ләкин китаптар араһында юҡ нәмәләр яҙылған, мәғәнәһеҙ нәмәләр менән тулғандары ла бар. Уларҙы уҡыу - ҡиммәтле ғүмерҙе бушҡа үткәреү. Шуның өсөн фекерҙәрҙе нурландырасаҡ, хоҡуҡто пакларға ярҙам бирәсәк, аҡылды арттырасаҡ китаптарҙы һайлағыҙ, башҡаларынан йыраҡ булығыҙ. Файҙалы китаптарҙы уҡыу күңелгә шатлыҡ килтерә, фекергә аҙыҡ була, зиһенгә ҡеүәт бирә.

• Ҡайһы бер кешеләр шулай була: "Китабы күп", - тип халыҡ араһында исемен сығарыр өсөн генә китап йыя. Тик уларҙы үҙе лә файҙаланмай, башҡаларға ла бирмәй. Хатта эстәрендә ни булғанын да белмәй. Улар йөк ташыусылар кеүек. Шуның өсөн һеҙ алырға теләгән китаптарҙы үҙегеҙгә файҙа алыу өсөн һайлағыҙ.

• Уҡыу кешенең йөҙөнә нур, күңеленә шатлыҡ килтерә. Шуның өсөн зиһен хеҙмәте менән шөғөлләнеүселәр арыҡ булһалар ҙа, аҡылдары һимеҙ һәм йөҙҙәре мөхәббәтле була.

## Остаз һәм мөғәллим

• Остаз һәм мәктәп етәкселәре һеҙҙең эшегеҙҙе юлға ҡуйыусылар һәм һеҙҙең өсөн хәсрәт сигеүселәр була. Остазығыҙҙың һеҙгә ҡарата олуғ хаҡтары бар. Шуның өсөн уларҙың әмерҙәрен кәмселекһеҙ үтәгеҙ. Улар тыйған эштәрҙе эшләмәгеҙ.

• Улар менән әҙәпле һөйләшегеҙ, артыҡ ҡысҡырмағыҙ, алдап һәм кешене ғәйбәт итеп һис һөйләмәгеҙ.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ



**Республикабыҙҙың Фән һәм техника өлкәһендәге республика дәүләт йәштәр премияһына дәғүә итеүселәр һаны йылдан-йыл арта барыуы ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс та фән үрҙәренә артылыусы йәштәребеҙҙең күп булыуын күрһәтә. Быға, һис шикһеҙ, республикабыҙҙың фәнни ҡеүәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар ҙа, Хөкүмәт тарафынан йәштәргә булған иғтибар ҙа этәргес бирәлер.**
**Быйылғы лауреаттар араһында тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның тарих факультетының өлкән уҡытыусыһы Рәсих ЗӘЙТҮНОВ та бар. Йәштәр башланғыстарын яҡлау һәм үҫтереү йылында абруйлы премияға лайыҡ булыусы йәш ғалим менән әңгәмә башҡорт йәштәренә хас сифаттар һәм, әлбиттә, милләтебеҙ тарихы, уны өйрәнеү үҙенсәлектәре тураһында барҙы.**

# КЕМ ИКӘНЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК...

## ситтәргә лә танытайыҡ

### Халыҡ тарихын кем яҙа?

Тарих өйрәнеү еңел эш түгел. Тарихсыларҙың һәйбәте, насары булмай, сөнки улар теге йәки был мәғлүмәтте уйлап сығармай, ә рәсми сығанаҡтарҙы, документтарҙы өйрәнеп эш итә. Тарихты бер ҡалыпҡа, ниндәйҙер идеологик ҡарашҡа һалып та өйрәнеп булмай. Был эштә объективлыҡ һәм яҙғаның өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тәүге урында торорға тейеш. Бөгөнгө көнгә Башҡортостан тарихы, уның һәр осоро, социаль структуралары, этнографияһы һ.б. бик ентекле өйрәнелгән. Мәктәп дәреслектәре лә профессиональ тарихсылар тарафынан төҙөлгән, был юҫыҡта борсолоуҙар урынһыҙ. Ғорурланырлыҡ тарихыбыҙ бар, ата-бабаларыбыҙҙың үткән юлы бик данлы һәм шанлы, башҡалар алдында йөҙ ҡыҙарырлыҡ түгел.

Әлбиттә, тарихта ҡапма-ҡаршылыҡлы әйберҙәр булыуы ихтимал, етмәһә, һәр кем дөрөҫлөктө үҙенсә эҙләй. Ниндәй генә заманда йәшәмәйек, профессиональ тарихсылар менән бер рәттән, тарих менән ҡыҙыҡһыныусы кешеләр ҙә күп була. Был йәһәттән шуны ғына әйтә алам: һәр фараз йәшәргә хоҡуҡлы, уларҙың эҙләнеүҙәре ҡыҙыҡлы була ала, улар ниндәйҙер кимәлдә асыш та эшләй, әммә фараз - дөрөҫлөк тигәнде аңлатмай әле. Шуға ла тарихи китаптарҙы, бигерәк тә милләт тарихын сағылдырғандарын күберәк тираж менән сығарып, бөтә ҡатлам уҡыусыларына ла еткерергә тырышыу мөһим.

### Асыштар буласаҡ әле

Бөгөн фән менән олпат ғалимдар ғына түгел, йәштәр ҙә шөғөлләнә. Башҡортостандың фәнни ҡеүәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар ҙа, йәштәрҙең һәр башланғысын хуплап ҡабул итеүҙәре лә быға ҙур йоғонто яһай. Мин "Башҡорт хәрби-революцион комитеты эшмәкәрлеге" тигән монографиям өсөн дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булдым. Был ғилми эш дүрт йыллыҡ тикшеренеүҙәремдең һөҙөмтәһе һәм БАССР-ҙың 90 йыллыҡ юбилейын байрам иткән мәлдә хеҙмәтемдең Хөкүмәт тарафынан да лайыҡлы баһаланыуы минең өсөн айырым мәғәнәгә эйә. Бындай оло баһа яуаплылыҡ та өҫтәй, яңы эштәргә көс һәм дәрт тә бирә.

Фән менән ҡыҙыҡһыныусы йәштәр күп һәм улар теге йәки был өлкәнең бер йүнәлешен дә иғтибар үҙәгенән ысҡындырмай. Тарих фәненә килгәндә, бөгөнгө көндә XV-XVI быуаттар тарихы ентекле өйрәнелә, ә IX быуаттан алып XII, хатта XIV быуатҡа тиклемге осор өйрәнеүселәрен көтә. Бер асыш та бер көн эсендә генә яһалмай, ниндәйҙер етди, нигеҙле тикшеренеү эшләйем тиһәң, был эшкә, әҙ тигәндә, 4-5 йылыңды сарыф итергә бурыслыһың. Күп документтарҙы уҡыу өсөн тарихсы боронғо төрки һәм славян телдәрен дә белергә тейеш.

Студенттар менән аралашҡанда, уларға гел хәрәкәттә булығыҙ, үҙ тарихығыҙҙы өйрәнегеҙ, тип әйтә киләм. "Һыу аҡмай, бер урында ғына ятһа, боҙола, еҫләнә башлай. Ә кеше организмының күп өлөшө һыуҙан тора", - ти торғайны яҡшы танышым. Башҡорт халҡында "Тик ятҡан таш аҫтынан һыу аҡмай", тигәнерәк мәҡәл һәм әйтем өлгөләре лә байтаҡ. Башҡорттар, Башҡортостан тураһында сит яҡтарҙа былай ҙа мәғлүмәт етмәй. Яңыраҡ беҙ, бер төркөм йәш ғалимдар, Мәскәүҙә уҙғарылған "Ломоносов - 2009" Халыҡ-ара фәнни форумда ҡатнашып ҡайттыҡ. Башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡарата тоғролоғо, сит ил илбаҫарҙары баҫып алған һуғыштарҙа, әйтәйек, Ҡырым, 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттарҙың Рәсәйҙе яҡлап һуғышыуын башҡа милләттәр белмәй. 1917 йылда Рәсәйҙең берҙәм дәүләтселеген һаҡлап ҡалыу инициативаһы менән дә башҡорттар сығыш яһай. Яңыраҡ Мәскәү өлкәһендә яҡланған бер диссертация тураһында ишетеп, хайран ҡалдым: унда башҡорттарҙы ненецтар менән сағыштырып, улар һаман күсмә тормош алып бара, тип яҙғандар. Тимәк, бынан ниндәй һығымта яһарға була һуң? Егерме беренсе быуатта йәшәйбеҙ, күп милләтле Рәсәй халҡы араһында үҙебеҙҙең йөҙөбөҙҙө күрһәтергә, исемебеҙҙе яҡтыртырға өйрәнергә ваҡыт.

### Рәсәй дәүләтенә нигеҙ һалыусылар

Минең фәнни эшем башҡорт хәрби-революцион комитет эшмәкәрлегенә бәйле. Ул 1919 йылдың 21 февраленән 1920 йылдың 21 июленә тиклем эшләй. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул яңы власть урынлаштыра, Ҡыҙыл Армияны башҡорт частәре менән тулыландыра, үҙәк һәм күрше төбәктәр менән конструктив бәйләнештәр булдыра. Башревкомдың аныҡ структураһы үҙәктәге генә түгел, ә урындағы идара итеү органдарын да үҙ эсенә ала, эште яҡшыртыу маҡсатында йыш ҡына уларҙың функцияһын да үҙгәртергә тура килә. Башревком ер, һатыу итеү, хужалыҡ мәсьәләләрен хәл итеүҙә ҙур роль уйнай. Башҡорт халҡының мәҙәни тормошон аяҡҡа баҫтырыуҙа Башревкомдың мәғариф комитеты үҙ өлөшөн индерә.

Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре "Үҙәк Совет власының Башҡорт хөкүмәте менән Башҡорт Совет Автономияһы" тигән мөһим тарихи акт төҙөүгә өлгәшә, тап ошонан һуң башҡорт халҡы күп милли хоҡуҡтарға эйә була. 1919 йылғы килешеү һәм Башревком эшмәкәрлеге Үҙәк һәм республика араһындағы ҡыҙыҡһыныуҙарҙы берләштереүгә юл аса, ә РСФСР составында барлыҡҡа килгән автономлы Башҡорт Республикаһы федератив дәүләт булараҡ Рәсәйҙең барлыҡҡа килеүенә нигеҙ һала. Башҡорт АССР-ы килешеү ярҙамында барлыҡҡа килгәс, традицияларҙы һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге тыуа, бында 1557 йылда башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыу ваҡиғаһы ла ниндәйҙер кимәлдә тарихи тәжрибә булып тора. 1917 йылда монарх власы ҡолатылыуы башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғы гарантының юғалыуына килтерә, эсер һәм большевик партияларының да ер программалары аҫабалыҡ хоҡуғын юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән була. Ошондай шарттарҙа Башҡорт хөкүмәте ерҙәрҙе Башҡорт АССР-ы территорияһында ҡалдырыу өсөн оло эш башҡара. Билдәле булыуынса, граждандар һуғышында урындағы халыҡ нык зыян күрә, шуға ла уларға нисек тә булһа ла ярҙам итеү маҡсатында Башревком ағзалары үҙәк властан субсидиялар юллауға ла өлгәшә.

Башревком һәм уның ағзалары З. Вәлиди, А. Йәғәфәров, Ш. Манатов, Г. Ҡарамышев һәм башҡаларҙың эшмәкәрлеге башҡорт милләте өсөн баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә, тап улар Башҡортостандың бөгөнгөһөнә нигеҙ һалыусылар булып тора.

### Баҫалҡылыҡ беҙҙе биҙәмәй

Бөгөнгө замандаштарыма күҙ һалам да, бер нәмәгә ҡабат-ҡабат инанам: башҡорт йәштәре бигерәк баҫалҡы. Тап ошо сифат оло эштәргә тотоноръа, үҙеңде башҡалар араһында күрһәтергә ҡамасаулай ҙа инде. Күптәребеҙгә ҡайһы саҡта ниндәйҙер эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн тырышлыҡ та, үҙһүҙлелек тә етеңкерәмәй. Маҡсатлы йәштәребеҙ Өфө кеүек ҙур ҡалаларға ынтылһын, ауылда йәшәүселәрҙе лә моңһоҙлоҡ баҫмаһын ине. Бөгөн ауылдарҙа йыйылып футбол, башҡа уйындар уйнаусы ла, күп ауыл биләмәләрендә йәштәрҙең ялын ойоштороусы ла юҡ. Әле республика буйлап ауылдарҙа төрлө мәҙәни, спорт-һауыҡтырыу үҙәктәре күп төҙөлә, йәштәргә буш ваҡыттарын файҙалы итеп уҙғарыу өсөн мөмкинлектәр асыла, тимәк, был мәсьәлә республика етәкселәрен дә уйландырмай ҡалмай. Шулай уҡ, хәҙерге ғаиләләрҙә атай менән әсәй, балаһы менән ултырып, тормош, донъяуи хәлдәр тураһында һөйләшмәй - шул ҡурҡыта мине. Бала иртән тороп уҡырға китә, ҡайтҡас, кәртә-ҡура тирәһендә үҙенә тәғәйенләнгән эште эшләй ҙә, телевизор ҡарап, үҙен ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте унан ала. Ҡалала интернет баланы үҙенең ауына әләктерә. Тәрбиәсе ролен телевизорға, интернетҡа тапшырҙыҡ та ул, бының һөҙөмтәһе ниндәй булыр - бөгөн бына ошо һорау ата-әсәне борсорға тейеш.

Бер ҡатлылыҡ бурлыҡтан яман, бер ҡатлы, ябай булмаһаҡ ине. Әле бөтә донъяла глобалләшеү бара, башҡорт йәштәренә лә үҙ донъяһына бикләнеп йәшәргә, үҙ түңәрәгендә генә әйләнергә ярамай. Сит ерҙәргә сығығыҙ, үҙегеҙҙе күрһәтегеҙ, хәҙер бының өсөн бөтә юлдар ҙа асыҡ - теләгең генә булһын.

**Шулай итеп...**

**Бына ошондай уйҙар һәм ниәттәр менән янып йәшәй йәш ғалим. Һәр кеше яҙмышын үҙе яҙған кеүек, һәр халыҡ та үҙ тарихын үҙе яҙа. Был тарихтың аҡ биттәре күберәк буламы, әллә ҡараға буялғанымы - бынаһы һәр беребеҙҙән тора, шуға ла ғилемле йәштәребеҙ арабыҙҙа тағы ла күберәк булһын, тип теләйбеҙ. Был бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә булған Тарих ҡуласаһы аҫтында юғалып ҡалмаҫ һәм сит ерҙәрҙә лә беҙҙе яҡшы яҡтан танып белһендәр өсөн кәрәк.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

***✓ Һәр халыҡ, һәр ырыу, һәр йорт тимерһеҙ йәшәй алмаған. Шуға ла башҡорттар бик борондан һәр төрлө мәғдән иреткән. Һәр бай йорт, аймаҡ, түбә хужаһы таш мейес (домна) тотҡан. Дөйөм хужалыҡ, ырыу мейестәре лә була.***



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

**Ун алтынсы быуаттың аҙағынан алып ун һигеҙенсе быуаттың икенсе яртыһына тиклем урыҫ батшалығының баҫып алыу сәйәсәтенә ҡаршы бер туҡтауһыҙ көрәшкән башҡорт иле, бигерәк тә көнсығыш өлөшө, һәр яҡтан ҡамауҙа ҡала. Көньяҡтан һәм көнсығыштан - Ырымбур нығытма һыҙаты. Төньяҡтан- тамам баҫып алынған Ибер. Йәнә Екатеринбург, Төмән, Томск ҡалалары... Көнбайыштан - империя.**

Башҡорт ере менән идара итеү өсөн 1708 йылда Өфө провинцияһы ойошторола. Урал алды (көнсығыш башҡорттары) Себер губернаһына индерелә. Әммә Себер губернаһы ҡара табындарҙың Исәт, Ишем буйҙарында йәшәгән өлөшө һәм ялан-ҡатайҙар өҫтөнән хакимлыҡ итһә лә, барындар, ҡыуаҡандар, тиләү-күбәләктәр уға әллә ни буйһоноп бармай. Бының асыҡ миҫалы булып, уларҙың яһаҡты йә бөтөнләйгә түләмәүе, йә айырым йорттар исеменән аҙ миҡдарҙа урындағы хакимдарға биреүе телдә ҡалған. Барындарҙың Себер губернаһына яһаҡ түләүе тураһындағы яҙма сығанаҡтар табылғаны юҡ. Шулай ҙа беҙҙең төбәк 1700 йылдарҙа формаль рәүештә булһа ла Урыҫ империяһының Себер губернаһына ҡараған.

Башҡорттар һәм ҡасаҡтар (казактар), шулай уҡ крепостной урыҫтар менән Төмәндән тороп хакимлыҡ итеп булмағас, 1720 йылдарҙа Себер губернаһынан айырып, Исәт провинцияһы төҙөлә. 1744 йылда Өфө һәм Исәт провинцияларын ҡушып, Ырымбур губернаһын яһайҙар.

Көнсығыш башҡорт ерҙәренә күптәнән инде Шәйҙә, Суҡы, Мәҫкәл, Һүлейә, Нөрөш, Өрәңге армыттары аша, йә Ибер яғынан үтеп, дәүләт эҙәрлекләүенән ҡасҡан һәр төрлө башкиҫәрҙәр, шулай уҡ сауҙагәрҙәр, махсус ебәрелгән шымсылар аша йыйылған белешмәләр империя канцелярияһында быуаттар буйына туплана. Һәр төрлө сәбәп табып, геодезистар ер хәритәһенә асыҡ та, йәшерен рәүештә лә тимер, баҡыр мәғдәне, аҫыл таштар, алтын, ҡурғаш, эзбиз һәм башҡа байлыҡтар тураһында мәғлүмәттәр йыя. Дәүләт тимер, баҡыр һәм башҡа мәғдәнгә ҡытлыҡ кисергәнгә күрә, Тула ҡорал слободаһының оҫтаһы Перфилий Мосоловты Петербургҡа саҡырып, Урал төбәгендә тимер иретеү заводы төҙөү тураһында тәҡдим яһайҙар. Билдәле, был мәсьәләне дәүләт тәүҙә үҙе ҡурсауға ала. Перфилий Мосолов был эште улдары Максим, Алексей, оло һәм кесе Ивандарға йөкмәтә. Мосоловтар, Петербург юлламаһына нигеҙләнеп, Златоуст заводын төҙөү өсөн 1751 йылдың 20 ноябрендә Ырымбур губерна канцелярияһы менән килешеү төҙөй.

Завод тәүҙә Әй йылғаһының ҡушылдығы Һатҡы һәм Ҡыуашы тамағында төҙөлөргә тейеш була. Әммә 1754 йылдың майында кесе Иван Мосолов Берг-коллегияға түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: "Сатка и Куваши маловодны, да и леса вокруг тех речек редки". Завод төҙөү өсөн ер, 1754 йылғы килешеүҙә әйтелгәнсә, "... под плотину, под фабрики и под всякое заводское и хоромное строение, рудные месторождения, которые были "приисканы" и впредь прияйцутся", бушлай бирелә. Төҙөләсәк завод ерҙәре 1735 - 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында дәррәү ҡатнашҡан Ҡыуаҡан, Күҙәй (Көҙәй), Табын, Барын, Ҡара Табын ырыуҙарының, ихтилал етәкселәренең, Аланейәнғол, Төлкөсура, Көсөк һәм башҡа күренекле шәхестәрҙең ере була.

Дәүләт Мосоловтарға үҙ ерҙәрен тирә-йүндәге аҫаба башҡорттар иҫәбенә ян-яҡҡа илле саҡырымға, ә ысынбарлыҡта күпме кәрәк, шулай киңәйтеү хоҡуғын бирә. Бынан башҡа, Мосоловтарға һәр йортта дүрт эшсе ҡулы булыуы иҫәбенән илле хужалыҡ крепостной крәҫтиән алырға рөхсәт ителә. Был рөхсәт нигеҙендә Иван Мосолов Әйле башҡорттарынан бик ҙур ерҙе ни бары 50 һумға ғына һатып ала. Завод төҙөү өсөн Ырымбур губерна указын кесе Иван 1754 йылдың 31 авгусында ала. Ә заводты ул май айында уҡ Әй йылғаһының Өрәңге тауы менән Ҡыятүр тауының араһынан ҡыҫылып үткән ерендә төҙөй башлай. Әйгә был ерҙә бәләкәй генә Таҫма йылғаһы ла ҡушыла. Алтынтамаҡ тигән был йәйләү элегерәк Ҡыуаҡан ырыуы кешеләренең даими йәшәгән еренә әүерелгән була.

Барын-табындарҙың ере Һыуаҫтан буйҙары, Оло һәм Кесе Урал армыттарының Шыйҙатҡан, Ҡылысбай тауҙарынан башланған. Златоуст ҡалаһы бейек тауҙар, ҡара урмандар, тулы һыулы Әй, йөҙәрләгән ваҡ йылғасыҡтар, шишмәләр һәм мәғдән өҫтөнә бер ҙә тиктомалдан ғына төҙөлмәгән. Ул ер башҡорттоң бик борондан мәғдән табыу, мәғдән иретеү, тимер, ҡорос һуғыу ере була. Даими ултыраҡ - Алтынтамаҡ ултырағы.

"История металлургии в России 18 века. Заводы и заводовладельцы" тигән китабында Н. И. Павленко 1759 йылда заводтың әле төҙөлмәүе, бер кузница (ҡуҙсыҡҡан), алты йорт, һарай һәм Әй аша быуаның яртыһы ғына төҙөлөүен яҙа. Быны, әлбиттә, урындағы башҡорттар төҙөй, заводтың төҙөлмәүен белгән Роман Илларионович Воронцов Берг-коллегияға: "Чрез долгое время оный завод поныне не построен и отведенное место лежит праздно," - тип, был заводты һорап хат яҙа. 1754 йылда уҡ бер туған дүрт Мосолов араһында бисәләре арҡаһында ғауға сыға. Мосоловтар хужалыҡтарын бүлешеп ала, Златоуст ере Максим Мосоловҡа тейә.

Тартып алыуҙарынан ҡурҡып, Максим Мосолов заводты төҙөү эшен тиҙләтә. Мәскәү янындағы Уржумка тигән ерҙән 485 крепостной крәҫтиән килтерә. Боронғо крепостной крәҫтиәндәр йәшәгән ауыл Златоуст ҡалаһы эргәһендә әле лә Уржумка булып йәшәп ята. 1761 йылға бер иретеү мейесе (домна), ике һандал эшләй. 1764 йылда заводта суйын иретеү, тимер эшләү, баҡыр иретеү эштәре юлға һалына.

**"Златоуст ҡалаһында металлург Аносовҡа һәйкәл ҡуйылған. Ысынында, был урында ҡорос иретеүсе һәм тимерсе Булат исемле башҡортҡа һәйкәл ҡуйылырға тейеш ине. Булат ҡоросон уйлап тапҡан кеше - ул бит! Ысын булат ҡоросо серен Булат үҙе менән теге донъяға алып китте. Уның сере берәй ваҡыт асылырмы, белеүе ҡыйын. Был - тарихи факт", - шулай тип һөйләне миңә боронғо ҡыпсаҡ нәҫелле Иван Кочубей.**

Әйтергә кәрәк, Мосоловтарҙың ҡулдарында суйын иретеүсе түңәрәк таш мейестәрҙең һыҙмаһы булмай. Рәсәйҙә ул ваҡыттарҙа тимер иретеү өсөн көнбайыш илдәре ысулына ярашлы, асыҡ ауыҙлы мейестәр ҡулланылған. Мосоловҡа тимерле ҡара таштан һалынған йә түңәрәк, йә дүрт ҡырлы ябыҡ мейестәрҙе Уралдағы башҡорт тимерселәре яһап биргән. Мейестәрҙе өҫтән башта күмер, аҡ шур, мәғдән һәм янар аҡ таш менән өҫтәп тултырып, аҫҡы яғынан тиренән тегелгән турһыҡ аша ике-өс кеше һауа өрҙөрөп яндырған. Тора-бара мейестәр ҡулайлаштырылған, тимерлектәрҙә, ҡуҙсыҡҡандарҙа (кузницаларҙа) тире-турһыҡ менән өрөп, тимер ҡыҙҙырғандар.

Һәр халыҡ, һәр ырыу, һәр йорт тимерһеҙ йәшәй алмаған. Тирә-йүндән кәрәкле тимер һатып алыу мөмкинлеге лә булмай. Меңәр саҡырым ерҙе үтһәң дә, тимер иретеүселәр булмай. Ә йәшәргә кәрәк, ҡорал да кәрәк. Шуға ла башҡорттар бик борондан һәр төрлө мәғдән иреткән. Һәр бай йорт, аймаҡ, түбә хужаһы таш мейес (домна) тотҡан. Дөйөм хужалыҡ, ырыу мейестәре лә була. Улар хужалыҡ мейестәренә ҡарағанда байтаҡҡа ҙур, һәм унда иретелгән мәғдән дөйөм ырыу мәнфәғәтендә ҡулланылған. Бындай мейестәрҙең эҙен Өрәңге, Һүлейә, Ҡылысбай, Нарәле, Йоҡатау, Шәйҙе һәм башҡа тау армыттары ҡыялыҡтарында һәм тимер, баҡыр, ҡурғаш сыҡҡан мәғдәнле ерҙәр тирәһенән эҙләргә кәрәк. Түңәрәк мейескә өҫтән ҡарағас күмере ҡоялар, өҫтөнә элек мәғдән ireткәндән ҡалған шур, эзбизташ, ҡыҫҡаһы, шлак менән мәғдәнде бутап һалалар ҙа, аҫҡы яғынан ут төртөп, һәр саҡ туҡтауһыҙ һауа өрҙөрәләр. Мейестәргә тире турһыҡ аша һауаны бер яҡтан да, ике-өс яҡтан да өрҙөргәндәр. Тире турһыҡтар иҫәбе, ҙурлығы мейестең килбәтенә, мәғдәндең дәүмәленә, сифатына һәм төрөнә бәйле булған.

Мейес янында ике-өс кеше эшләй. Береһе мәғдән ҡойһа, икеһе һауа өрҙөргән. Мейестең бейеклегенә, мәғдәндең дәүмәленә ҡарап, уны өҫтән ҡойоусылар икәү-өсәү ҙә булған. Мәғдән иретеү мейестәре янында шул уҡ тире турһыҡтар менән өрмәле ҡуҙсыҡтар (кузницалар) була. Унда инде ireп ағып төшкән суйынды тағы ла эҫе утта ҡыҙҙырып, таш йә тимер һандалға һалып, ҡырҡҡыс сүкештәр менән киҫкеләп, кәрәк-яраҡ эшләгәндәр.

Урыҫ дәүләте Мосоловтарға тиклем үк Уралда, бигерәк тә Урта Уралда, эҙләнеү эштәрен бик ныҡышмалы алып бара. Һәр яҙ һайын Мәскәү Уралға экспедиция артынан экспедиция ебәрә. Әммә ул ваҡытта алтынлы ерҙәрҙе таба алмайҙар, көмөш мәғдәненең эҙҙәрен (знаки) билдәләйҙәр, ләкин тимерле ергә осрайҙар. Мәғдәнле урынды кем алда табыуын батшаға еткереү өсөн болашып, Тубыл һәм Тура воеводалары үҙ-ара һуғышып китә. Ул ваҡытта Романовтарҙың тәүге кешеһе Михаил Федор улы Романов (1613-1645) тәхеттә ултыра. Уралда тәүге мәғдән иретеүсе мейес Ҡариҙел йылғаһының уң ҡушылдығы Нәзә йылғаһы буйында була (хәҙерге Нязепетровск ҡалаһы ерендә). 1631 йылда унда урыҫтар тәүге мейестәрен төҙөй, әммә ул бик бәләкәй, ғаилә кимәлендәгеләй булыуы һөҙөмтәһендә, күп эшләй алмай. Урыҫ тарихсылары был турала бик аҙ яҙа, йә бөтөнләйгә өндәшмәй. Свердловскиҙа 1973 йылда сыҡҡан "Горные заводы Урала" тигән яҙмаһында Ю. Буранов тигән тарихсы ғына асыҡ итеп яҙа был турала.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы бар).**

*ҺАБАҠТАР*

**Теремек, шат Заһирҙың мәктәптәге тәртибенә ҡарағанда, уның ғаиләһендә бөтәһе лә ал да гөл кеүек тойола ине. Бер көндө ул мине ғәжәпкә ҡалдырып, серен систе:**

# АТАЙҘАР ҺӘМ...

- Атайымды яратмайым, беҙ берберебеҙҙе күралмайбыҙ...

Заһир түкмәй-сәсмәй үҙ кисерештәрен һөйләне. Атаһына үс итеп, төрмәгә эләгергә маташып ҡылған мутлыҡтарын бәйән иткәндә, берсә яндым, берсә туңдым. Был мин белгән Заһир түгел ине. Яңы ғына эшләй башлаған сағым, кәңәш бирергә тәжрибәм дә юҡ, шулай ҙа насар уйҙарҙы башынан сығарыуын, уҡып, кеше булыуын теләнем.

Институтта белем алды Заһир, ҙур кеше булып китте, әммә үҙе атай-олатай йәшенә етһә лә, атаһына, хатта әсәһенә лә ирей алманы. Уларҙың араһы нилектән ҡаҡшаған? Ошо һорау мине һәр сак борсоно.

Мәктәптә эшләгән йылдарҙа атайҙар менән әңгәмә ҡорғанда улдарына ҡараштары, мөнәсәбәттәре тураһында гел генә һораша йөрөйөм. "Көс ҡулланаһығыҙмы?" тигән һорауыма бер саҡ ошондай яуап алдым.

Бер ата:

- Оят булһа ла һөйләйем әле. Балам тыңламағанда гел ҡайыш менән тәрбиәләнем. 9 синыфҡа еткәс, ошоно уҡ үҙемә күрһәтә башланы улым. Таяҡ ике осло була, бөгөн - һин, иртәгә ул көслө. Киләсәгемде үҙем төҙөнөм. Балаларҙы битәрләп, йәберләп түгел, яҡшы һүҙ, яҡты йөҙ менән өйрәтеү кәрәк икән. Бер әйткәндә үк йүгереп йөрөүен, ҡаршы һүҙ әйтмәүен талап итмәй, шәхес булараҡ ҡарарға, тауыш күтәрмәй, аныҡ, шул уҡ ваҡытта етди аңлата белергә кәрәк булған да бит, - тип һөйләне, үкенеүен белдерҙе.

Ошо уҡ һорауға бер дин белгесенән щундай яуап ишеттем:

- Кеше Юғары көскә мөрәжәғәт итә һәм кәрәген һорап ала белеүсе берҙән-бер йән эйәһе. Нимәнелер һорар өсөн Ҡөрьәнде белергә кәрәк. Баланың йәне беҙгә Алланан ваҡытлыса 14 йәшкә тиклем аманат итеп бирелә. Ошо осорҙа ата-әсә изге китапта яҙылған ҡанундарҙы үтәргә, Юғары көскә мөрәжәғәт итергә тейеш. Балаға ҡурсаҡҡа ҡарағандай ҡарап, һүҙһеҙ буйһондороуҙы талап иткәнде Аллаһ һөймәй, хаталарҙы иҫкәртеү маҡсатында ауырыу, бәхетһеҙлек ебәрә, ә бәндә, дини наҙан булһа, уны аңламай.

14 йәшкә тиклемге бала өсөн ата-әсә - "Алла", ошо ваҡытта рухи донъя төҙөлөшөн өйрәтәһе урынға, ата-әсә баланы кәмһетеп, ҡул көсө ҡуллана икән, 14 йәштән һуң бала "Алла"һынан һыуына, тыңлауһыҙға, тәртипһеҙгә әйләнә, өйҙән ҡаса, бер ҡыйыҡ аҫтында ҡалған осраҡта ла ата-әсә мәңгелеккә ят кешегә әүерелә. Әйткәндәй, хәҙер йәштәрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары артты. Юғары көс баланың рухы бөтөнләй һынмаҫ, үлмәҫ элек, уны үҙенә ала, киләсәктә икенсе ата-әсәгә тапшыра. Балалар проблемаһы - беҙҙең динһеҙ, иманһыҙ, дөрөҫ йәшәмәү һөҙөмтәһе.

Заһир менән бәйле һорауҙарыма мин яуап таптым, тип уйлайым.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

✓ *Шуныһы маҡтауға лайыҡ: беҙ уҙғарған осрашыуҙарҙа алкоголгә урын юҡ. Бер-береһе менән бөтөнләй таныш булмаған кешеләр эскеһеҙ ҙә рәхәтләнеп күңел аса ала.*



# АРАЛАРҒА ТУҒАНЛЫҠ

## интернеттағы

**Бөгөнгө заманда милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, әсә телен киләсәк быуынға үҙ матурлығында еткереү өсөн, иң мөһиме, үҫеп килеүсе йәш быуында ҡаҡшамаҫ рух, милләтенә, иленә һөйөү, тыуған иле, шәхестәре менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләүҙер ул. Тап ошо өлкәлә интернеттағы Башҡорт порталы ҙур роль уйнай. Интернет селтәрҙәрендә башҡортса портал булыуы беҙҙең өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. Ошо хаҡта порталды төҙөүсе веб-администратор Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ, Башҡорт форумының модераторы Әхәт МӨХӘМӘТОВ һәм уның әүҙем ҡулланыусыһы Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА менән башҡорт порталының әһәмиәте, роле тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Хәҙерге тормошто интернетһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Интернетта шулай уҡ башҡорт телендә лә йәнең теләгән мәғлүмәтте табырға була. Башҡорт порталының маҡсаты, әһәмиәте тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине.**

**Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ:** Ул ваҡытта интернет беҙҙең илгә ул хәтлем үтеп инмәгәйне әле. Мин бер шәхси фирмала эшләп йөрөйөм, үҙемдең дә интернетты саҡ өйрәнгән ваҡытым. Бер ваҡыт "Яндекс"ҡа инеп, ҡыҙыҡ өсөн "Башкиры" тип яҙып, эҙләү төймәһенә баҫтым. Шул ваҡыт ниндәйҙер ят сайт асылды һәм минең унда яҙылғандарҙы күреп, иҫем китте. Сөнки ул сайт башҡорттар тураһында дөрөҫ булмаған, бысраҡ мәғлүмәттәр менән тултырылғайны. Халҡыбыҙға кемдәрҙеңдер шулай хаҡһыҙ бысраҡ яғып маташыуҙарын күреп, шул тиклем йөрәгем әрнене. Тимәк, кем башҡорттар менән ҡыҙыҡһына, минең кеүек, тура ошо сайтҡа инәсәк һәм милләтебеҙ тураһында унда яҙылғандарға ышанасаҡ. Шуға күрә, халҡыбыҙ тураһында дөрөҫ мәғлүмәтле сайт булдырыу мотлаҡ, тигән ҡарарға килдем. Иң беренсе "Йәшлек" гәзитенең сайтын эшләнем, ул әле лә үҙ көсөндә. Яйлап дөйөм башҡорт порталы төҙөлдө. Интернетта үҙебеҙҙең битте тәүге тапҡыр 2003 йылда булдырҙыҡ. Башҡорт порталы төрлө сайттарҙан, форумдан, башҡорт чатынан тора. Әлеге ваҡытта форумда 1600 кеше ҡатнаша, шуларҙың күбеһен йәштәр тәшкил итә. Хәҙерге көндә илебеҙ, милләтебеҙ тураһында ҡыҙыҡһыныусылар беҙҙең сайттарҙы ҡулланып, унан дөрөҫ, раҫланған мәғлүмәттәр менән ҡуллана ала.

Порталды булдырған ваҡытта төрлө ҡаршылыҡтар осраһа ла, халҡым алдындағы яуаплылыҡ эшемде аҙағына тиклем алып барып еткерергә көс бирҙе. Хәҙерге көндә Башҡорт порталы камиллашты, тип әйтә алам, артабан да эшебеҙ үҙ юҫығында уңышлы дауам итер тип уйлайым.

Шулай уҡ сит өлкәләрҙә, илдәрҙә йәшәүсе башҡорттар менән бәйләнеш тотабыҙ. Бер нисә йыл элек, беҙҙә интернет ул хәтлем таралмаған саҡта, башҡорт чатында, форумда аралашыусылар тик сит өлкәләрҙән һәм сит илдәрҙән генә булды. Сит илдә йәшәгән милләттәштәребеҙ тыуған илен һағынып, әсә телендә аралашыуға һыуһап, интернетҡа инә. Беҙ күрше өлкәләрҙә, Египетта, Төркиәлә, Американа йәшәүсе милләттәштәребеҙ менән аралашабыҙ. Хәҙерге көндә интернет беҙҙә лә киң таралды, хатта ауыл халҡы өсөн дә ул ят түгел. Шулай итеп, интернет донъяның төрлө тарафтарына таралған милләттәштәргә аралашыу мөмкинлеге бирә.

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Хәҙерге көндә Башҡорт порталы халҡыбыҙ өсөн бик кәрәк. Интернет селтәрҙәрендә алып барылған аралашыуҙа бөйөк сер йәшеренгәнен барыбыҙ ҙа аңлап етмәй. Башҡорт форумы ла ҡоро аралашыу урыны ғына булмаҫҡа, ә беҙҙең милләт мәнфәғәтенә эшләргә тейеш. Элек төрлө яҡтарҙа йәшәгән башҡорттар "Каруанһарай"ға йыйылып, яңылыҡтар менән уртаҡлашҡан, ил-йорт хәбәрен бүлешкән. Хәҙер халҡыбыҙҙың дөйөм осрашыу, аралашыу урыны юҡ. Беҙ башҡа милләттәр менән буталып, төрлөбөҙ төрлө яҡҡа таралышып бөткәнбеҙ. Бөгөнгө көндә башҡорт порталы "Каруанһарай" ролен виртуаль рәүештә башҡара, тип әйтә алабыҙ. Ул үҙә килә, йылдан-йыл даирәһе киңәйә, ҡатнашыусылар ҙа күбәйә, темалары ла арта. Әлеге көндә һәр районда Башҡорт порталының төркөмдәре бар: Баймаҡта, Сибайҙа, Учалыла, Силәбелә улар әүҙем эшләй.

Йәштәребеҙ киләсәктә Башҡорт порталынан нимәгә ынтылырға, нисек күтәрелергә, ҡайҙа барырға, тигән һорауҙарына яуаптар һәм шуға өлгәшеү юлдарын да табырға тейеш. Үҫешкән милләттәр менән бер рәттә булыр өсөн беҙгә киң даирәлә аралашыу, башҡа милләттәрҙән яҡшы өлгө ала белеү, сит телдәрҙе өйрәнеү мөһим. Шуға күрә, бер-беребеҙ араһында Интернет селтәре аша булһа ла бәләкәй генә күперҙәр төҙөү кәрәк. Форумдың һынай ағы ошонда күренә лә инде: милләттәштәр төрлө ерҙә йәшәүгә ҡарамаҫтан, Интернет аша таныша, осраша, хатта ҡауышалар. Әммә артабан интернет селтәрҙәре аша ғына һөйләшеп ултырмаҫҡа, ә осрашып кәңәшләшеү, аралашыу, тәҡдимдәр менән бүлешеү мөһим. Беҙ тәбиғәт ҡосағында төрлө осрашыуҙар уҙғарабыҙ. Һабантуй, сәйәхәттәргә әҙерләнеү шулай уҡ һәр кемдән сабырлыҡ, ныҡышмалыҡ талап итә. Ошо сараларға әҙерлек ваҡытында йәштәр үҙ йүнен үҙҙәре йүнләргә, аҡса менән эш итергә, аралашырға өйрәнә.

**Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА:** Тәүге тапҡыр Башҡорт форумына осраҡлы ғына килеп эләктем. Һуңынан ҡулланыусыларҙың яҙмамы менән теркәлеп, үҙем дә форумда яҙыша башланым. Ҡыҙыҡһынып, һәр темаһы уҡып барам, үҙемдә тыуған фекерҙәрҙе теркәйем. Ысынлап та, бөгөнгө технология алға киткән заманда интернет селтәрендә башҡортса портал булыуы бик мөһим. Ер йөҙөндәге бар халыҡ хәҙер интернет ҡуллана. Башҡорт порталында ла йәнең теләгәнде табырға була. Иң мөһиме, файҙаһыҙ, кәрәкмәгән мәғлүмәттәр юҡ беҙҙә: беҙҙең портал кешенең аңын, рухын үҫтереүгә йүнәлтелгән. Форумда ниндәйҙер китаптан алынған мәғлүмәттәр түгел, ә кешеләрҙең үҙ-ара тере һөйләшеүе бирелә. Кешеләр бер-береһенә яҙыу формаһында үҙҙәре менән булған хәл-ваҡиғаларҙы һөйләй, проблемалар менән уртаҡлаша, аралаша, дуҫлашып китә. Шуныһы маҡтауға лайыҡ: беҙ уҙғарған осрашыуҙарҙа алкоголгә урын юҡ. Бер-береһе менән бөтөнләй таныш булмаған кешеләр эскеһеҙ ҙә рәхәтләнеп күңел аса ала.



**▸ Башҡорт форумында аралашыу мәҙәниәтенең бик юғары булыуын teләйбеҙ һәм шуға ынтылабыҙ. Ләкин ҡайһы саҡта унда ҡатнашыусылар ниндәйҙер мәғәнәһеҙ һөйләшеүҙәргә лә төшөп китkeләй. Йәштәр менән халҡыбыҙға, илебеҙгә, телебеҙгә бәйле етди темаларға һөйләшеп буламы?**

**Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ:** Башҡорт форумында аралашыу мәҙәниәте кимәле еңелелпе, тип әйтмәҫ инем, сөнки беҙ йәштәргә ошо аралашыу яҙмамында дөрөҫ юл күрһәтеп, уларҙы тәрбиәләргә тырышабыҙ. Йәштәр менән күберәк етди темаларға фекер алышабыҙ. Төрлө кешеләр бар, әлбиттә. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәр форумды уйынсыҡ урынына күрә, башҡа эштәре юҡ кеүек ҡыланып, юҡ-бар хәбәрҙәр яҙып ҡуя. Уларҙы милләт, халыҡ, ер, ил мәсьәләһе бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай кеүек. Интернет селтәрҙәрендә беҙ үҙебеҙ генә түгел, беҙҙе күҙәтеүселәр ҙә бар. Әгәр ҙә беҙ халҡыбыҙға ҡағылышлы ниндәйҙер хәбәр ысҡындырһаҡ, кемдәрҙер шуны "һә" тигәнсе эләктереп алаcаҡ, унан һуң инде бөтә селтәргә "Башҡорттар шулай яҙа" тигән хәбәр таралыуын көт тә тор.

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Беҙҙең форумға инеп, көндәлек мәшәҡәттәр, юҡ-бар тураһында хәбәр һатыусыларҙы мин үҙ аллы йәшәп өйрәнгән, әйләнәтирәһен күрмәүсе, кешелек проблемаларын аңламаған, вайымһыҙ кешеләр, тип атайым. Башҡорт форумында яҙышҡан һәр кем үҙенең башҡорт халҡының ҙур китабын яҙыуҙа ҡатнаша икәнлеген аңларға тейеш. Ул форумға яҙып, тарихҡа үҙенең һүҙен ҡалдыра, йәғни форумға ингән һәр кеше үҙенең өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ ала. Ә унда инеп, тел һындырып сығыуҙың файҙаһы юҡ. Беҙҙең форумда ла, чатта ла ҡулланыусылар өсөн дөйөм ҡағиҙәләр бар: һүгенергә, әрләшергә ярамай. Шуны һәр кем иҫтә тотһа, аралашыу мәҙәниәте кимәле лә яҡшы булыр.

**Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА:** Башҡорт форумында яҙылған мәҡәләләрҙе уҡып, уға яуап яҙған осраҡта кешенең фекерләү ҡеүәһе үҫешә. Үҙеңә төбәлгән һорауҙарға урынлы һәм тапҡыр яуап бирә белеү өсөн тәрән аҡыл кәрәк. Форумда тарих, әҙәбиәт өлкәһе тураһында, сәйәси, ижтимағи темаларға әңгәмә ҡоралар. Әгәр ҙә был өлкәлә һай йөҙһәң, әңгәмәгә ҡушылып китеүе ауыр буласаҡ. Кемдеңдер фекере "Хәлдәр нисек?", "Һәйбәт" тип бөтһә, икенселәр матур һөйләмдәр менән, фекерләп яҙа белә. Интернетта яҙышып аралашҡан саҡта кеше эстәге "мин"ен сығара. Кешенең күҙенә ҡарап, барыһын да әйтеп булмай, йә уңайһыҙландыра, йә икенсе сәбәптәр табыла. Ә был осраҡта ул ҡыйыулана, мине барыбер бер кем дә күрмәй, тип уйлай. Ошо сәбәптәр арҡаһында күптәр енел-елпе, туҙға яҙмаған хәбәрҙәрҙе халыҡ алдына сығарыуҙан тартынмай. Башҡорт форумына инеүселәргә шуны әйтер инем: һеҙ бит үҙебеҙҙең милли йөҙөбөҙҙө һынландырған Башҡорт порталына инәһегеҙ. Үҙегеҙҙең әҙәпһеҙлегегеҙ арҡаһында башҡаларҙа милләтебеҙ тураһында кире фекер тыуҙырыуға юл ҡуймағыҙ.

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Кешеләр араһында төрлө һөнәр эйәләре, шул уҡ ваҡытта төрлө холоҡлолары бар. Шуға күрә беҙҙәге темаларға ла төрлө ҡараш була. Тәбиғәт тураһында әңгәмәләшһәк - дуҫбыҙ, сәйәси темаға бөтәһе лә яҙа алмай. Шулай ҙа ниндәй генә темаға баһа бирһәк тә, яҙһаҡ та, аралашһаҡ та, һәр беребеҙ үҙенең башҡорт икәнен оноторға тейеш түгел. Милләтебеҙҙе һаҡлау - беҙҙең ҡулда, шуға күрә аныбыҙ теүәл, һаулығыбыҙ яҡшы, ғилемебеҙ тәрән булырға тейеш. Форум - аралашыу урыны, ундағы әңгәмәләрҙә беҙҙең милли йөҙ сағыла. Мин үҙем рустар араһында үҫтем, башҡортса әле саҡ һөйләшергә, фекерләргә өйрәнәм. Бәләкәйҙән яҙырға яратмай торғайным, киләсәгебеҙ хаҡына, йәштәрҙе тәрбиәләү хаҡына форумда үҙемде мәжбүр итеп яҙырға өйрәнергә тура килде.

Телебеҙҙе белеүебеҙ менән ғорурлана алабыҙ, сөнки маңҡорт булып китеүе ҡыйын түгел, ә кире асылына ҡайтыуы ауыр. Беҙҙең порталда ниндәйҙер аныҡ маҡсат ҡуйылмаған, берҙән-бер ҡыҙыҡһыныуы - башҡортлоҡ, милли рух.

**▸ "Ҡәләм осонда ҡылыс көсө бар" - тиҙәр, тимәк, Башҡорт порталына инеүселәргә һеҙҙең яҙмалар көслө тәьҫир итерлек булырға тейеш. Порталда күберәк ниндәй мәҡәләләр урын ала?**



**Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ:** Башҡорт порталында әхлаҡи, милли, тарихи, сәйәси, ижтимағи темаларға арналған мәҡәләләрҙе яңыртып торабыҙ. Башҡорт порталын мауыҡтырғыс һәм ҡулланыусыларға ҡыҙыҡлыраҡ булһын өсөн төрлө яҡтан биҙәйбеҙ, байытабыҙ. Мәҡәләләр халҡыбыҙ өсөн әһәмиәтле, файҙалы, шул уҡ ваҡытта ҡыҙыҡлы ла булырға тейеш. Халыҡтың башын бутарға маташыусылар, беҙҙең яҙмаларға кире баһа биреүселәр ҙә бар, әлбиттә. Уларҙы киҫәтәбеҙ, аңламаһалар - сығарабыҙ.

Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: интернетта беҙҙең форум иң таҙа форумдарҙың береһе һанала. Беҙ бер ҡасан да бүтән форумдарҙағы кеүек, башҡа милләттәрҙе кәмһетеп,

✓ Сайтта тик ошо гимназияны тамамлаусылар ғына теркәлә ала. Киләсәктә интернатты тамамлаусы 2-3 мең кешене табырға ниәтләйбеҙ. Әле теркәлеүселәрҙән был сайтты булдырған өсөн тик рәхмәт һүҙҙәре генә ишеттек.



# КҮПЕРЕ ҺҮҘА ...

## Башҡорт порталы

ысын күңелдән борсолоп, халҡыбыҙҙы, еребеҙҙе нисек ҡотҡарыу тураһында уйланып яҙған фекерле йәштәр инеүе ҡыуандыра. Порталда әүҙем яҙыусылар, ҡулланыусылар һәм тик уҡып сығыусылар бар. Ҡулланыусылар форумға инеп, уны ҡарап ҡына сыҡһалар ҙа башҡорт халҡы тураһында дөйөм мәғлүмәткә эйә була. Уҡып сығыусылар интернеттың башҡа сайттарында яҙылған, гәзит-журналдарҙа донъя күргән төрлө мәғлүмәттәр менән беҙҙең порталда яҙылғанды сағыштырып ҡарай. Мәҫәлән, Америка шул мәсьәлә буйынса нимә яҙа, Рәсәй ни уйлай, башҡа илдәр ниндәй ҡараште, ә башҡорт порталында был турала нимә яҙалар? Шул тиклем күп мәғлүмәттәрҙе уҡыған кешелә төрлө ҡараш, фекер тыуа. Шуға күрә, беҙ үҙебеҙҙең порталға үтә ныҡ иғтибарлы һәм талапсан булырға хаҡлыбыҙ. Кеше әлеге киң мәғлүмәтле донъяла үҙ аңы менән дөрөҫ фекерләп, аҡылына таянып йәшәп өйрәнергә тейеш. Шулай уҡ: "Дөрөҫ һорау - ғилемдең яртыһы" тигән кеүек, һорауҙарына ҡарап та кемдең кем икәнлеген белергә була.

**▸ Форумда битлек кейеп сығыш яһау, йәғни ҡушамат аша аралашыу дөрөҫмө? Анонимлыҡ үҙеңдә иркен тоторға мөмкинлек бирһә лә, аралашыуҙың төп ҡануны - асыҡлыҡ, башҡаларҙан бер нәмәне лә йәшермәү. Фотоңдо биреп, үҙеңде танытып сығыш яһау дөрөҫөрәк булмаҫ инеме икән?**

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Интернетта үҙеңә "ник" алып, йәғни ҡушамат менән аралашыу ысулы

уларға сүп-сар өйөп, ғәйбәт һөйләп ултырмайбыҙ.

Үҙенә күрә бәләкәй генә ижад мөйөшөбөҙ ҙә бар. Унда үҙҙәренең шәхси ижад өлгөләрен, мәҫәлән, шиғырҙарын, бала саҡ хәтирәләрен, студент мәҙәктәрен яҙалар. Ижадты халыҡҡа, йәмәғәтселеккә еткереүҙең яңы төрө булараҡ, ижад мөйөшө форумда аралашыу мәҙәниәте кимәлен үҫтереүгә лә булышлыҡ итә.

**Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА:** Башҡорт форумында йәш быуынды мәҡәләләр аша тәрбиәләү, әҙәп-әхлаҡҡа өйрәтеү - беҙҙең төп бурыс. Һәр кем матур яҙырға, башҡаларға итәғәтле булырға, сабырлыҡ һаҡларға тейеш. Алдыбыҙға ҡуйылған бурысыбыҙға тоғро ҡалып, форумда тәрбиәүи темаларға күп сығыш яһайбыҙ. Йәштәргә тәьҫире булалыр, күрәһең, сөнки үҙҙәре үк был яҙмаларға баһа биреп ҡуя. Киләсәктә ижад биттәрен киңәйтергә кәрәктер, тип уйлайым.

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Башҡорт форумына халҡыбыҙ тураһында ҡулланыла. Интернетта ултырыусы һәр кем ниндәйҙер һөнәр эйәһе, мәҫәлән, беҙҙең Башҡорт порталында ла профессорҙар, фән кандидаттары, артистар, яҙыусылар, журналистар, студенттар һәм башҡалар бар. Юғары вазифа биләп ултырған кеше үҙ исеме менән интернеттағы төрлө темаларҙа ҡатнашып китә алмай, сөнки дәрәжәһе лә, абруйы ла быға булышлыҡ итмәй. Шулай уҡ яратҡан хоббийың буйынса аралашыу ҡушамат артында уңайлыраҡ.

**Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА:** Ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, ниндәй генә вазифа биләмәһен, һәр кем эстән - фәйләсүф. Үҙенең уй-фекерен тулыһынса кемгәлер түгергә лә теләй ул.

Шуныһына иғтибар иткәнем бар: һәр кемдең ҡушаматы унық эске торошона тап килә. Кемдер "Аждаһа", кемдер "Уҫал башҡорт", кемдер "Ҡояшҡай". Ҡушамат аша ғына белгән кешене күрһәң, уның ысынлап та ҡушаматына тура килгәнлеген аңлайһың. Исем, фамилияларын



күрһәтеүселәр ҙә бар. Башҡорт порталында аралашыусылар бер-береһен хәҙер ҡушамат аша ла белеп бөткән. Хатта күрешкәндә лә ҡушаматтар менән һөйләшеп китәбеҙ. Беҙҙең портал аша табышып ҡауышыусылар бер-береһенә шул тиклем тап килә, сөнки улар күҙгә-күҙ ҡарашып ҡына ғашиҡ булмаған, һәр ваҡыт яҙышып аралашҡанға күрә, уларҙың фекерҙәре, ҡыҙыҡһыныуҙары, хатта уйҙары ла тап килә.

**Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ:** Ҡушамат артына йәшенеп аралашыуҙың ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла бар, әлбиттә. Кире яҡтары: битлек артына йәшенгән кешелә оялыу, уңайһыҙланыу, намыҫ тойғоһо юғала һәм ул нимә теләй, шуны яҙырға үҙенә юл ҡуя. Ундай кешеләр менән күп осраҡта аңлашырға тура килә. Ыңғай яҡтары: һин интернет аша төрлө проблемалар буйынса әңгәмә ҡорһаң да, халыҡтың һорауҙарына яуап бирһәң дә - бер кем танымай, тимәк, һиңә бер ниндәй ҡурҡыныс янамай. Был осраҡта мөмкин тиклем халҡыбыҙға, телебеҙгә бәйле мәсьәләләрҙе сисеп ҡалырға мөмкин.

**▸ Хәҙер башҡорт йәштәре араһында инглиз телен белеүселәр күп, улар ярҙамында башҡорт тормошо тураһында мәғлүмәттәрҙе бөтә донъя селтәренә сығарыу мөмкинлеге бармы? Бәлки, был йүнәлеште лә ҡарарға кәрәктер?**

**Илфат ИШМӨХӘМӘТОВ:** Ҡаҙағстандан беҙҙең менән аралашҡан бер башҡорт егете телде белмәгән сит илдәрҙә йәшәүсе милләттәштәргә уңайлы булһын өсөн инглиз телендә сайт асты. Ул шулай уҡ башҡортса сыҡҡан мәҡәләләрҙе инглиз теленә тәржемә итеп, донъя селтәренә сығарырға ла тәҡдим иткәйне. Был эш бер аҙ ҡатмарлыраҡ, сөнки инглиз теленә тәржемә итһәк, уны ҡарап, тикшереп тороусы ышаныслы модератор кәрәк. Был эште ҡапыл ғына башлап булмайҙыр, тип уйлайым. Иң беренсе беҙгә, үҙебеҙҙең телдә нығынып, халыҡты туплап алырға кәрәк. Шунан һуң бөтә донъя селтәренә таралырбыҙ.

**Нәзирә СЫҢҒЫҘОВА:** Әле был эш башланғыс алды, тип уйлайым. Киләсәктә дауам итеренә, үҙебеҙҙең порталдың инглиз нөсхәһен дә күреребеҙгә ышанам.

**Әхәт МӨХӘМӘТОВ:** Әгәр ҙә сит илдәрҙә беҙҙең халыҡ, республика менән ҡыҙыҡһынһалар, киләсәктә инглиз телен индереүҙең файҙаһы булыуы мөмкин. Улар беҙҙән мәғлүмәт һорап яҙһа, беҙ яуап бирәсәкбеҙ. Әлеге ваҡытта интернет аша теләгән мәғлүмәтте латин хәрефендә яҙып эҙләп тапҡан кеүек, башҡорттар тураһында мәғлүмәтте улайтып донъя селтәренән табып булмай. Интернетта инглиз телендә "мин - башҡорт", тип аралашыусылар юҡ кимәлендә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт порталы тураһында һуңғы ваҡытта улар уҙғарған саралар аша ғына ла белеүселәр күбәйҙе. Ысынлап та, әленән әле мауыҡтырғыс та, ҡыҙыҡлы ла, күңелле лә, фәһемле лә саралары уҙып тора уларҙың. "Башта йәштәрҙе саҡырырға, өгөтләргә тура килһә, хәҙер улар үҙҙәре әүҙемләште, беҙҙең ярҙамһыҙ ғына ла төрлө осрашыуҙар уҙғарып ҡуя", - тип һөйләй әңгәмәселәрем. Ошо әңгәмәнән һуң бөгөнгө көндә Башҡорт порталының халҡыбыҙға ҙур файҙа килтергәнен аңланым. Интернет селтәрендәге тормошта милли рух уяна, аң үҫешә, әҙәп, әхлаҡ тәрбиәләнә, берҙәмлек көсәйә. Халҡыбыҙҙың төп аралашыу үҙәгенең береһенә әйләнгән Башҡорт порталы киләсәктә үҙенең эшен ошо юҫыҡта дауам итһен, тип теләйек.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

АФАРИН!

# ЗАМАНДАН ҠАЛЫШМАЙЫҠ, ТИП...

## үҙ сайтыбыҙҙы булдырҙыҡ

**Заманса аралашыу саралары көндән-көн тормошобоҙға үтеп инә бара. Интернет хәҙер кешеләрҙең төп аралашыу сараһына әйләнде, тип тә әйтә алабыҙ. Сайттар аша дуҫтар менән аралашаһың, яңы таныштар табаһың, кәрәкле мәғлүмәттәр алаһың - бөгөн интернетта ҡолас йәйеп йөҙөргә мөмкинлектәр бар. Бына Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия- интернатының да хәҙер үҙ сайты бар. Был хаҡта сайтты ойоштороусыларҙың береһе Салауат СӨНӘҒӘТУЛЛИН һөйләй:**

- Рәми Ғарипов исемендәге **1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты** республикабыҙҙың иң алдынғы мәктәптәренең береһе һанала. Был гимназияны тамамлаусылар республикабыҙҙың юғары урындарында эшләй, һәр береһе иле, халҡы өсөн фиҙәкәр хеҙмәте менән танылған. Күптән түгел гимназияның сығарылыш синыф уҡыусылары тураһында киң мәғлүмәт базаһы булдырыу маҡсатында интернаттың үҙ сайтын булдырҙыҡ. Хәҙер мәктәпте тамамлаусы синыфташтарға бер-береһен табып аралашырға, фекер алышырға мөмкинлектәр киңерәк. Был сайтта тик ошо гимназияны тамамлаусылар ғына теркәлә ала. Киләсәктә интернатты тамамлаусы 2-3 мең кешене табырға ниәтләйбеҙ. Әле теркәлеүселәрҙән был сайтты булдырған өсөн тик рәхмәт һүҙҙәре генә ишеттек. Ысынлап та, гимназияны күптән тамамлаған синыфташтар бер-береһе менән йыш күрешеп, аралашып тора алмай - һәр береһенең үҙ донъяһы, үҙ көйө. Шулай ҙа бергә уҡыған йылдар һағындыра, класташтар, уҡытыусылар менән туйғансы бер ултырып һөйләшке, фекер алышҡы, уларҙың тормошондағы үҙгәрештәр тураһында белге килә... Ошондай саҡта нәҡ беҙҙең сайт ярҙамға килә лә инде: рәхәтләнеп аралаш, хәтирәләр менән уртаҡлаш - быныҡ өсөн аралар алыҫлығы ла, ваҡыт тарлығы ла кәртә була алмай. Мәғлүмәт яланында һәр теркәлеүсе күренеп тора, шулай уҡ таныштарыңды мәғлүмәттәре буйынса табыу мөмкинлеге лә бар. Профессиональ эшмәкәрлек буйынса төрлө төркөмдәр төҙөнөк (тағы ла өҫтәләсәк әле), һәр кеше үҙенең ҡыҙыҡһыныуы буйынса теләгән төркөмөнә теркәлә ала. Сайтта милләт-ара ыҙғыш тоҡандырырлыҡ һүҙҙәр әйтеү тыйыла, был РФ законы буйынса эҙәрлекләнә.

Бөгөн күп кеше ниндәйҙер сайтҡа теркәлгән ваҡытта үҙҙәре тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе йәшереп ҡалырға тырыша. Ләкин беҙҙә теркәлгән саҡта исем-шәрифегеҙҙе, атайығыҙҙың исемен, тыуған йылығыҙҙы, гимназияны нисәнсе йылда тамамлауығыҙҙы, эш урынығыҙҙы, вазифағыҙҙы һәм бәйләнеш телефонығыҙҙы мотлаҡ күрһәтергә кәрәк.

Шулай уҡ төп бурыстарыбыҙҙың береһе йәштәргә ярҙам итеү, уларҙы яҡшы эшкә урынлаштырыу. Беҙҙә эш урыны вакансиялары бар. Быға тиклем йәштәргә сығыуы ауыр була торғайны, ә хәҙер кандидаттарҙы сайт аша табырға мөмкин буласаҡ. Сайт күптән түгел генә ойошторолһа ла, теркәлеү бик әүҙем бара. Әлеге көндә бөтәһе 233 кеше теркәлгән, 30 төркөм бар. Көн һайын теркәлеүселәр һаны артҡандан-арта бара.

Быйыл Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназия-интернатының 65 йыллыҡ юбилейы үтәсәк. Гимназияны тамамлаусыларға был юлы ла сайт ҙур ярҙам күрһәтәсәк: юбилейға ҡарата бөтә мәғлүмәттәр сайт биттәрендә урын аласаҡ, иғландар ҙа бында биреләсәк.

Сайт - ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеү сараһы ла булып тора. Бөгөн барыбыҙ ҙа ваҡыт етмәүенә зарланабыҙ. Сайт - мәғлүмәт еткереүҙең иң тиҙ һәм етеҙ ысулы. Бөгөнгө көндә беҙ ошо сайтты камиллаштырыу, кешеләрҙән анкеталарҙы тулыһынса тултырыуҙы талап итеү, коммуникацияны яҡшыртыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Сөнки хәҙерге көндә кешеләрҙең интернетта аралашыу мөмкинлеге киң: һәр береһенең бер нисә аралашыу селтәрҙәрендә бер нисә почта йәшниге бар. Ҡайһы бер селтәрҙәге йәшниктәрен улар инеп тә ҡарамай. Беҙҙең бурыс - кеше беҙҙең сайтта теркәлеп кенә ҡалмай, көн һайын инерлек булһын өсөн уны тулыһынса камиллаштырыу.

Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназия-интернатын тамамлаусылар был сайтҡа **Internatskie.ru** адресы аша инеп теркәлә ала.

✓ ***Бөйөк булһын Рәсәй! Дәғүәм юҡ,***
***Булғанда ла ғорур бер ҡайын.***
***Ләкин әсәй тиһәм, Шүлгән рәнйер,***
***Ағай тиһәм, рәнйер Арҡайым!***



ябай берәй һүҙ өҫтәйем дә, ҡотолдом. Вәт, булды, ҡул ҡуям да, вәссәләм! Ҡой, Аня апай, тамаҡ кипте!

Иван Иванович үҙенең улы менән йәштәш ирҙең, бала сағынан яҡшы беләм тип уйлаған кешенең сәйер холҡона, ҡылған яуапһыҙлығына, бөтә донъяһына битараф булыуына аптырап, иҫәңгерәп ҡарап ултырып, һуңғы яҙған һүҙен абайламай ҙа ҡалды. Күршеһе килешеүгә етди документ түгел, шарттарын боҙһам да бер нәмә лә булмаҫ, еңел ҡотолормон, тип уйламаһын, ҡурҡмаһа ла, һипһенһен өсөн Иван Иваныч яҙаларҙы юрамал тупаҫ, мәрхәмәтһеҙ, оятһыҙыраҡ итеп ҡороп маташты. Улар ни тиклем аяуһыҙ булһа, тәьҫире лә шул хәтлем көслөрәк булыр, аҡылынан аҙғанды ла шикләнергә, һаҡланырға мәжбүр итер, тип уйланы. Дөрөҫөн әйткәндә, был килешеүҙең етди үтәлеренә ышанмай ҙа ине: эсеп, донъяһын онотоп йөрөгән әҙәмгә ниндәй ышаныс булһын инде. Тик, кеше үҙе ҡул ҡуйған ҡағыҙҙан әҙерәк булһа ла шикләнә, шөрләй торған, шуға ла ҡағыҙ күберәк Батыр өсөн. Иван Иванович үҙе ышанған икенсе "сихыры" тураһында өндәшмәне. Бәләкәйҙән үҙенең бер сәйер һәләте бар икәнен белә, ләкин кеше көлөр, тип, быға тиклем кәрәкһеҙгә артыҡ ҡулланманы.

Бала ғына сағында бер көн иптәш малайына уйнарға барҙы. Башмаҡтай эттәре бәйенән ысҡынып, урамдарында йөрөгәндә, барып инде уларҙың ихатаһына. Теге эт ҡалын, ҡурҡыныс тауыш менән "Һау-һау, һау-һау-һау!" тип, уға етеп килә. Иван ыштанына бес итә яҙып, эттең күҙҙәренә текләп, торған ерендә ҡата ла ҡуя. Эт тә килеп еткән еренән шып туҡтай. Иптәшенең атаһы килеп сығып, быларҙы айырып ала. Шунан һуң эттең хужаһы һунарсы ағай: "Ивандың малайы әллә этемде сихырланы инде, бөтөнләй өрөүен онотто ла ҡуйҙы. Ялбарып күҙгә ҡарап тора, сыйылдауҙан башҡа тауыш сығара алмай, бахыр. Элегерәк һунарға барғанда йәнлек-маҙар күрһә, бөтә урманды яңғыратып "һаулар" ине, хәҙер өрмәй, ғәжәп!" - тип зарланды. Ул эт тәки өрөргә өйрәнмәне. Өлкән кешеме, малайҙарҙың берәйһеме, тышауы һыпырылған атын тота алмай ҡамап йөрөһә, тура барып йүгәнен ат башына кейҙереп тә күптәрҙе аптырата торғайны Иван. Ҡустыһы йә ҡарындаштары бәлә һалып илағанда ла күҙҙәренә текләп ҡарап тороп ҡына тыйғаны бар. Уларға, баяғы эт менән булған хәлде иҫләп, ныҡ текләп ҡарамай торғайны. Өлкән кешеләр һуғышыр хәлгә етеп ирешеп талашҡандарында ла үҙен һынап ҡарағаны булды, талаштарын онотҡан һымаҡ, бер-береһенә аптырап ҡарашып тынып ҡала торғайнылар.

x x x

... Ярһып-ярһып, өйөрөлөп ҡойон уйнай, ҡойон...

Радионан берәү ярҙамға саҡырған кеше кеүек, йәне әсенеп һөрәнләй. Һөрәнләй инде, урамда дәүер ҡойоно донъяны дер һелкетә. Ҡойон дауыл, ғәрәсәт түге-е-ел, ул һәләкәт! Буран, дауыл көс, ғәйрәт йыйғанын әллә ҡайҙан күрһәтеп, ҡурҡытып килә. Уларҙы иҫкәртеп, һаҡланыр өсөн алдан әҙерләнеп була. Ә ҡойон, юха йылан һымаҡ, күңелдәрҙе арбап, күҙҙәрҙе ҡыҙыҡтырып, йәнде елкендереп, ҡойроғо менән ерҙе һыйпап уйнаҡлап килә лә, күҙ асып йомған арала бөтә донъяның аҫтын-өҫкә әйләндереп үтә лә китә.

...Ҡалһаң ҡойон уртаһында, ҡыйын икән, ҡыйын...

Ҡыйындыр инде, ҡыйындыр, кемгә еңел бөгөн? Бер әҙәм балаһы ғына түгел, бөтә донъя ҡойон уртаһында ҡайнай. Дәүер өйөрмәһе кемдәрҙелер еңел генә күккә сөйә, кемдәрҙелер күтәреп тороп ергә ялпаштыра һуға, кемделер сит-ят ерҙәргә сығарып быраҡтыра.

Иван Ивановтың ата-балалары был яҡтарға бәхетле тормош эҙләп килмәһә лә, йәшәргә уңайлыраҡ шарттар көҫәп килеп төпләнгәндәрҙер. Замана елдәре нигеҙҙәренән тамырҙарын йолҡоп алып, ошо яҡтарға, башҡорттар иленә, башҡорттар араһына алып килеп ташлағандыр. Башҡорттар менән урыҫтар әүәлдән бергә йәшәгәне билдәле. Тәүҙәрәк, айырым ауылдар уҡ булмаһа ла, 1557 йылдан һуң батша ғәли йәнәптәре үҙ күҙәтеүселәрен, шымсыларын башҡорт ерҙәренә күсерә башлай. Баҡыр иретеү заводтарына, алтын прискыларына, күҙ-ҡолаҡ өсөн дә, эш ысулдарын өйрәнеү өсөн дә үҙенең вәкилдәрен тәғәйенләй. Ә инде 1861 йыл батша указы менән "крепостное право" ғәмәлдән сығарылғас, башҡа наҡыҫ, ҡыҫынҡы ерҙәрҙә йәшәгән халыҡтар күпләп башҡорт биләмәләренә йүнәлә.

Бына шундай ят ерҙәргә яҡты тормош эҙләп киткән ғаиләләрҙең бер осмото Иван Ивановтар тоҡомо. Уның ата-бабалары Урал тауҙары аша Ира яҡтарынан күсенеп килгән. Сәсән ауылы халҡы ла килмешәктәрҙе хуш ҡабул иткән заманында. Улар был нимә төртһәң, шул яҡшы шытым биргән, шаулап-сайҡалып үҫеп ултырған ҡарурманлы, саф һыулы инеш-шишмәләргә, балыҡҡа бай ерҙәргә ныҡлап тамыр йәйә, үҙ хужалыҡтарын булдыра һәм ошо ерҙәргә ерегеп рәхәтләнеп йәшәп китә. Уларҙың күңелен был яҡтың хозур тәбиғәте үҙенә мәңгелеккә ғашиҡ иткәндер, күрәһең. Бер һауа һулап, бер һыу эсеп, бер-берендең нимәгә һәләтле икәнен белмәй йәшәү кемде ҡәнәғәтләндерһен, ни тиһәң дә, ҡыҙыҡһыныу хисе бар кешелә. Тәүҙәрәк үҙ телдәренә ары-бире таныш рус һүҙҙәре ҡыҫтырып, белмәгән ерҙә ымлашып аңлашалар. Ул ҡыҙыҡһыныу, өйрәнеү ике яҡта ла бер иш ҡыҙыу булғандыр, сөнки урындағы халыҡтың русса һөйләшергә өйрәнгәнен көтөп ултырмай, һәләтлерәк килмешәктәр үҙҙәре һәүетемсә башҡортса һупаларға өйрәнә. Күптәре башҡорт телен ҡәҙимге аралашырлыҡ кимәлдә башҡорттар рус телен үҙләштереүҙән алдараҡ өйрәнеп ала. Күсеп килгәндәрҙең икенсе быуыны, һис булмаһа, өсөнсө быуыны башҡортса таҙа һөйләшеүгә ирешә. Ҡатнашып, ул күргәнде күреп, ул түҙгәнде түҙеп, бер шишмә һыуын эсеп, бер ерҙең икмәген ашап, һауаһын һулап йәшәгәс, ниңә ул халыҡтың телен белмәҫкә? Был ят тел өйрәнеүҙең бер сәйер хикмәтле яғы ла була. Рустар башҡорт телен яҡшы белһә лә, русса һөйләшкәндә үҙ телдәренә бер генә башҡорт һүҙен дә ҡушмай. Ә башҡорттар, әҙ-мәҙ генә русса һупалай башлағас та, кем менән, ҡайҙа аралашһалар ҙа, һөйләштәренә урынлы-урынһыҙ рус һүҙҙәрен ҡыҫтыра.

Иң ҡыҙығы, быуындар алмашыу менән дә шул сәйер ғәҙәт башҡорт халҡында әле лә йәшәй һәм дауам итә. Башҡорт телен камил белгән рус кешеһенең үҙ теленә башҡорт һүҙен ҡушып һөйләшкәнен бер ваҡытта ла күрмәҫһең. Был турала Иван Иванович күп уйланғаны бар. Халыҡтың шул тиклем теле боҙолоуға битараф булыуына ғәжәпләнеү түгел, йәне көйә уның. Ғүмерендә ауылдан ун саҡрым алыҫ йөрөмәгән Дәүләтбикә әбей "на што миңә хылапот" тигән һүҙбәйләнешен нимә тураһында һүҙ барһа ла ҡыҫтырып һөйләй. Сирғәле ағай "досуг юҡ" тигән һүҙҙе ҡайҙан йоҡторғандыр инде. Тәмәке һораһалар ҙа, бисәһе ашарға ҡайт тиһә лә, эшкә бараһыңмы тиһәләр ҙә, бер яуап: "Досуг юҡ"! Бер атҡаҙанған уҡытыусы тәмләп тороп ашаған нәмәһен дә "Зараза!" тип маҡтай. Уның кеүек мәҙәктәрҙе күп белә Иван Иваныч. Былай һаҡһыҙ ҡыланһалар, оҙаҡҡа бармай, телдәрен яһалма ҡатнаш телгә әйләндереп, туған телдәренең сафлығын юғалтыуҙары көн кеүек асыҡ. Асылдары башҡорт булғас, русса уйлап фекер йөрөтөүҙәре икеле, ә башҡортса уйлау һәләттәрен юғалтһалар, уйһыҙ, ғәмһеҙ халыҡҡа әүерелерҙәрме икән? Башҡорт телендә һөйләшеү Иван Ивановичтың күңеленә кинәнес, йәненә яғымлылыҡ, уйҙарына сафлыҡ, фекерҙәренә тоғролоҡ бирә. Шуға ла ул башҡортса һөйләшергә ярата. Яңыраҡ бер журналда уҡып ултырғайны, баҡтиһәң, 20-се быуатта ғына ер йөҙөндә 100-ҙән ашыу тел юғалған икән. Тимәк, был шул хәтлем халыҡ юҡҡа сыҡҡан, тигәнде аңлата, сөнки халыҡтың башҡаларҙан айырмалы төп үҙенсәлеге, уны халыҡ итеп танытканы - тел. Сәс, күҙ төҫтәре, танау, ауыҙ, ҡолаҡ төрлөлөгө, тән төҙөлөшө бер халыҡҡа ғына хас һыҙат тип иҫбат итеп булмай. Һәр халыҡта ла йөҙ, төҫ, ғәҙәттәр төрлөлөгө бихисап. Документаль фильм ҡарап ултырғанда тағы бер сәйер хәлгә иғтибар иткәйне ул. Фашист Германияһы Европаны, һуңғараҡ Советтар Союзын баҫып инә башлағас, аҙ һанлы халыҡ вәкилдәрен асыҡлап, башҡаларҙан айырып өйрәнергә керешә. Фильмдә башҡорт егетенең кәүҙәһен, ағзалары күләмен төрлө яҡтан үлсәйҙәр, тел, һөйләшеү үҙенсәлектәрен асыҡлау өсөн 20-гә тиклем, шунан тиҫтәләп 100-гә, йөҙләп 1000-гә тиклем һаналар, 10 минут үҙе теләгән темаға һөйләтәләр, башҡорт алфавитын яҙҙырып алалар, иң аҙаҡтан хатта йырлағанын яҙалар. Имәнес хәл тиерһең, ә фәһеме бар. Фашист булыуына ҡарамаҫтан, үҙе ҡырып бөтөрөргә уйлаған халыҡтарҙың үҙенсәлектәрен өйрәнеп, яҡшыларын үҙ милләтенә һеңдерер өсөн һаҡлап ҡалырға тырышҡан улар. Хәҙерге мәлдә ҡайһы халыҡтарҙың үҙ йөҙөн, үҙ телен, үҙ асылын үҙаллы юғалтыуҙары имәнес хәл түгелме ни? Ят халыҡтың милли һыҙаттарын күрер, өйрәнер өсөн, ҡыҙыҡһынып, аҡыллы кешеләр, аҡсаларын да, ваҡыттарын да йәлләмәй, ете диңгеҙ аръяғына сит илдәргә сәйәхәткә йөрөйҙәр. Ә беҙҙә, шундай бай тарихлы, бай мәҙәниәтле халыҡ араһында әллә нисәмә быуын нәҫелнәсәбәһе менән бергә йәшәп, ул халыҡтың тарихын, киләсәген белергә ынтылыу түгел, бөгөнгө бурыс, маҡсаттары менән дә ҡыҙыҡһынмағандар бар. Йәнәһе, улар ошо халыҡ араһына ваҡытлыса ғына килгәндәр ҙә, ҡаталарын да сисеп тормай, кире ҡайҙалыр күсеп китергә йыйыналар. 5-6 быуын түгел, 2-3 быуын бер ерҙә тыуып үҫһә, тамырҙар шул мөхиткә йәбешкәнен аңламайҙар микән? Күңелен байытыр өсөн Хоҙайҙан бүләк ителгән ошондай форсат менән файҙаланмаған кеше аҡыллы буламы? Ул үҙен кәмһетмәйме? Башҡорт халҡының эскерһеҙ күңелен, ярҙамсыл икәнен, үҙ телен белгән ят кешене үҙ туғанындай яҡын күреүен атаәсәһенән, үҙ ғаиләһенә мөнәсәбәттәренән яҡшы белә һәм ҡәҙерләй Иван.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

**Салауат ӘБҮЗӘР**

*Урыҫты беҙ: "Өлкән ағай", - тибеҙ,*
*Һәм әйтәбеҙ: "Рәсәй,-тиеп,- әсәй",*
*Был халыҡҡа беҙҙең йөрәктәрҙә*
*Ихтираммы... Әллә ҡурҡыу йәшәй...*

*Әсәй, тиһәм уны, Шүлгән рәнйер,*
*Ағай, тиһәм, рәнйер Арҡайым.*
*Тарихыбыҙ меңәр йылдар аша*
*Ярылып ята ла һуң йыр һайын!*

*Ишетмәнеңме ни шул йырҙарҙы,*
*Һиңә әйтәм, башҡорт уланы?*
*"Урал"дарҙы ижад иткән халыҡ*
*Кемдәргәлер ҡусты буламы?*

*Йә, һеҙ тыңлап үҫмәнегеҙме ни,*
*Аҡһаҡалдар, һеҙҙән һорайым:*
*Балалайка сирттеләрме икән*
*Уйнағанда башҡорт ҡурайын?*

*Бөйөк булһын Рәсәй! Дәғүәм юҡ,*
*Булғанда ла ғорур бер ҡайын.*
*Ләкин әсәй тиһәм, Шүлгән рәнйер,*
*Ағай тиһәм, рәнйер Арҡайым!*

## Туфан

*Күҙ йәшенән Туфан ҡалҡа,*
*Сәсәй-сәсәй бата рух.*
*Ҡулдарымды һуҙам күккә:*
*"Ҡотҡарсы, пәйғәмбәр Нух!"*

*"Кем гонаһһыҙ был донъяла*
*Шуларҙы һеҙ алығыҙ..."*
*Барыһы ла килеп тулды,*
*Емерелде һалыбыҙ...*

## Мент

*МЕНТтар менән донъя тулған,*
*МЕНТтар - беҙҙең фундаМЕНТ.*
*Унда ла - МЕНТ, һулда ла - МЕНТ,*
*Бында ла - МЕНТ, унда - МЕНТ...*

*МЕНТалитет беҙҙең шулай,*
*Ил башында - парлаМЕНТ.*
*Гүйә беҙҙең тормошобоҙ*
*МЕНТтан торған орнаМЕНТ.*

*Енәйәттән торған илдең,*
*Ни әйтәһең даны - МЕНТ.*
*Булғас булһын: шул МЕНТтарға*
*Асайыҡ бер монуМЕНТ.*

x x x

*Йөрәгемде һурып бәрҙем -*
*Кәрәге юҡ йөрәктең.*
*Ерҙә йөрәкһеҙ йәшәргә,*
*Тормош, үҙең өйрәттең.*
*Һурып бәрҙем күҙҙәремде -*
*Донъя тулы һуҡырҙар...*
*Кемгә хәжәт яҙғандарың,*
*Һуҡырҙармы уҡырҙар?*
*Ҡолаҡтарға тыҡтым бөкө,*
*Йолҡоп алдым телемде...*
*Ҡеше шикелле йәшәйем -*
*Йә, хәҙер мин кем инде?*

## Меҫкен

*Бер маҡталыр өсөн бәғзе*
*Кәмселеккә төшә.*
*Ғәжәп.*
*Юғала намыҫ, илтифат,*
*Юғала унда*
*Әҙәп.*

*Маҡтайҙар быны, маҡтайҙар...*
*Маҡтайҙар бына*
*Өс көн.*
*Һуң, маҡталып, кәмһенгәнен*
*Аңламай микән*
*Меҫкен?*

x x x

*Тормош юлы буйлап*
*Атлап киләм,*
*Оҙата мине һәр саҡ*
*Яҡты һын:*
*Әсә - Ҡояш!*
*Һыртын борғанда ла*
*Ул барыбер сәсә*
*Яҡтыһын.*

✓ *Ябай киҙеүгә ҡарағанда, сусҡа киҙеүе бындай сирлеләрҙә тын юлының аҫҡы бүлектәрен зарарлай, пневмония барлыҡҡа килтерә - быны дауалаусы табиптар онотмаҫҡа тейеш.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ИЛДӘ СИР ЙӨРӨЙ...

■ Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, Мәскәүҙә киҙеү һөҙөмтәһендә 155 мәктәптә 306 синыф, мәктәп-интернаттарҙа 6 һәм 48 балалар баҡсаһында 65 төркөм карантинға ябылған. Бер мәктәп һәм өс балалар баҡсаһы тотошлай ябылған, Рәсәй Халыҡтар дуҫлығы университетының медицина, иҡтисад һәм аграр факультеттарында ла дәрестәр туҡтатылған. Көҙ төрлө вирустар былай ҙа әүҙемләшә, шуға ла балаларҙың ниндәй киҙеү менән ауырығанын аныҡ ҡына әйтеп булмай. Уны билдәләү өсөн махсус тест-система ҡулланылырға тейеш, быны ата-әсә үҙе аҡса түләп эшләтә ала.

■ Ельцин исемендәге Урал политехник институт исемен алыштыра. Хәҙер ул Урал Федераль Университеты тип йөрөтөләсәк. Рәсәйҙә Федераль вуздар бөтәһе етәү буласаҡ, Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ҡарарына ярашлы, бындай уҡыу йорттары Архангельскиҙа, Ҡаҙанда, Владивостокта һәм Якутскиҙа барлыҡҡа киләсәк. Ярты йыл эсендә Хөкүмәт яңы университеттар үҫеше буйынса программа раҫлаясаҡ. Билдәләнеүенсә, федераль университеттар төбәктең икенсе вуздарын һәм Фәндәр академияһының бүлектәрен берләштерә ала. Бындай схемаға ярашлы, көньяҡ һәм Себер университеттары барлыҡҡа килде лә инде. Красноярскиҙа, мәҫәлән, бер юлы дүрт вуз берләште, ә Екатеринбургҡа ниндәй юғары уҡыу йорттары ҡушыласаҡ, әлегә билдәле түгел.

■ Россельхознадзор Төркиәнән килтерелгән 25,6 тонна мандаринды Рәсәйгә индереүҙе тыйҙы. Был татлы емеш Урта диңгеҙ себене менән зарарланған булған. Был бөжәк хәүеф тыуҙырыусылар рәтенә инә, ул, башлыса, әфлисун, мандарин, авокадо, хөрмә, инжир, ҡәһүә, банан, лимон, ер еләге, гранат, абрикос, алма, слива, һары сейә, йөҙөм, финик, томат, баклажан, боросто зарарлай. Был төр 1954 йылдан Австрияла барлыҡҡа килә, 1956 йылда себен Вена тирәһендәге 90-100 процент уңышты юҡҡа сығара. Германия һәм Грецияла ошондай уҡ хәл ҡуҙғатылә. Флоридала был ҡоротҡосҡа ҡаршы көрәшеү өсөн 1956-1958 йылдарҙа ғына 11 миллион доллар тотонола. СССР территорияһына ҡоротҡостар 1937 һәм 1964 йылдарҙа зарарланған емеш менән эләгә.

■ 2010 йылда абитуриенттар документтарын биш юғары уҡыу йортона һәм вуз эсендә өс бүлеккә генә тапшыра аласаҡ. Юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеүҙең яңы тәртибенә РФ Мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко ҡул ҡуйған, документ Юстиция министрлығында теркәлеү үткәндән һуң, үҙ көсөнә инәсәк. Рособрнадзор етәксеһе Любовь Глебова белдереүенсә, бөтә уҡыу йорттары ла абитуриенттарҙың БДИ һөҙөмтәләренең дөрөҫлөгөн танытмаларҙың федераль базаһынан (ФБС) тикшерергә бурыслы. Уҡыу йортона документтарын тапшырырға килгән абитуриент тураһында ҡабул итеү комиссияһы хәҙер ошо уҡ базала мәғлүмәт ҡалдырырға тейешле.

■ "Росгосстрах" компанияһының стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге белдереүенсә, мәскәүлеләргә үҙҙәрен бәхетле тойоу өсөн 62 мең һум, ә Кострома һәм Пензала йәшәүселәргә айына 25 мең һум эш хаҡы етә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, үҙенең оклады менән рәсәйлеләрҙең 86 проценты риза түгел. Иң ҙур эш хаҡын юғары белемле 50-60 йәшлек ир-ат ала. 40 процент респондент юғары эш хаҡына өмөт тә итмәй, бәләкәйерәк ҡалала бындай кешеләр ҙә күберәк. Яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө киләһе дүрт йыл эсендә матди хәленең яҡшырасағына ышана.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# СУСҠА КИҘЕҮЕ ТУРАҺЫНДА...

## ун уйҙырма

**Сусҡа киҙеүе нимәһе менән ҡурҡыныс һәм ябай тымауҙан уны нисек айырырға? Был һорауға медицина фәндәре кандидаты, "Роспотребнадзор"ҙың молекуляр диагностика һәм эпидемиология бүлеге етәксеһе Герман ШИПУЛИН яуап бирә.**

**1-се уйҙырма. Сусҡа киҙеүе ябай киҙеүҙән ҡурҡыныслыраҡ.**

- Әгәр ҙә сәләмәт тормош алып барһығыҙ икән, был сирҙе үткәреп ебәреүе еңелерәк буласаҡ. Ә иммунитеты ҡаҡшаған, диабет, астма, артыҡ ауырлыҡтан яфаланған, насар туҡланған кешеләр сусҡа киҙеүенә тиҙ бирешә. Был категорияға ауырлы ҡатындарҙы, ВИЧ-инфекцияһы йөрөтөүселәрҙе лә индерергә кәрәк. Ябай киҙеүгә ҡарағанда, сусҡа киҙеүе бындай сирлеләрҙә тын юлының аҫҡы бүлектәрен зарарлай, пневмония барлыҡҡа килтерә - быны дауалаусы табиптар онотмаҫҡа тейеш.

**2-се уйҙырма. Беҙҙә "испанка"ға ҡарағанда ла ҡурҡыныс эпидемия көтә.**

- Әгәр ҙә сусҡа киҙеүен 1918 йылдағы испанка менән сағыштырһаҡ, тәүгеһенең икенсеһенә ҡарағанда ҡурҡыныслыраҡ. Испанка ай һайын яҡынса 4 млн кешенең ғүмерен алып китһә, бөгөнгә көнгә донъяла сусҡа киҙеүенән үлеүселәр һаны 4 мең тирәһе.

**3-сө уйҙырма. Сусҡа киҙеүенән һаҡланыусы берҙән-бер сара булып марля битлек иҫәпләнә.**

- Битлек ауырыуҙан һаҡланыу өсөн түгел, ә сирле кеше ауырыуҙы башҡаларға йоҡтормаһын өсөн кәрәк. Сирле кеше сөскөргән саҡта битлек ҡулъяулыҡ ролен үтәй һәм вирус тамсыларына таралырға ирек бирмәй. Шуға ла битлек кейергә мөмкинлегегеҙ юҡ икән, ауыҙығыҙҙы ҡулъяулыҡ, бер тапҡыр ҡулланыла торған салфетка, һис булмаһа, ҡулығыҙ менән ҡаплап сөскөрөгөҙ. Был осраҡта ҡулдарҙы ла йыш йыуыу кәңәш ителә, сөнки инфекция ҡулдар аша ла күсеү һәләтенә эйә.

**4-се уйҙырма. Офистағы телефон трубкаһы йәки кран борғосо аша сусҡа киҙеүе йоҡторорға мөмкин.**

- Офистамы, башҡа кеше күп йыйылған урындарҙа киҙеүҙең төп таралыу ысулы - һауа-тамсы юлы. Сөскөргән саҡта инфекция кешенән 2-3 метр алыҫлыҡҡа оса һәм вирустарҙан торған аэрозоль болот барлыҡҡа килә. Тирә-йүндәгеләр ошо аэрозолде һулай һәм зарарлана. Шуға ла эш урынында мускулдар, баш ауыртыу, тамаҡ һәм танау буйында әсетеү барлыҡҡа килеү, танауҙан һыу ағыу кеүек сирҙең тәүге билдәләре күренә башлау менән коллегаларығыҙҙы ла ауыртмаҫ өсөн ҡайтып китегеҙ.

**5-се уйҙырма. Сусҡа киҙеүенән вакцина эпидемия аҙағында ғына килеп сығыуы ихтимал.**

- Бөгөн АҠШ-та теркәлеү үткән 4 вакцина бар, әммә әлегә улар ҡулланылмай. Был вакциналарҙы яһап сығарған компаниялар дозаны күбәйтеү өҫтөндә эшләй. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, вакцинация быйылғы йылдың октябрь-ноябрь айҙарында башланасаҡ. Беҙҙең илдә тере вакцина етештереү тамамланды һәм ул Петербургта һынау үтәсәк.

**6-сы уйҙырма. Вакцинаны тик дауаханаларҙа ғына яһатып буласаҡ.**

- Әле ике төрлө вакцина эшләнә - тере һәм үлтерелгән. Тереһе - көсһеҙләндерелгән сусҡа киҙеүенең вирусы, уны үҙегеҙ танауға тамыҙа алаһығыҙ. Был төр вакцина көҙ аҙағына барлыҡҡа киләсәк. Үлтерелгән вакцинаны укол ярҙамында дауаханаларҙа эшләйәсәктәр, уның йыл аҙағына әҙер булыуы көтөлә.

**7-се уйҙырма. Йәшелсә һәм емеште күп итеп ашаһаң, иммунитет күтәрелә һәм сусҡа киҙеүе йоҡмаясаҡ.**

- Организмды нығытыусы төрлө саралар ҡулланыу, әлбиттә, яҡшы. Тик бындай юл менән генә вирустан һаҡланып булмаясаҡ. Сусҡа киҙеүен һәр кем йоҡтора ала, айырма сирҙең ҡатмарлығында ғына.

**8-се уйҙырма. Сусҡа киҙеүен ябай киҙеүҙән айырым билдәләр буйынса һәр кем үҙе айыра ала.**

- Пациент быны үҙе бер нисек тә билдәләй алмай. Етмәһә, бөгөнгә көнгә табиптар ҙа был сирҙең клиник диагностикалау методикаһы менән таныш түгел. Тын юлдары сирҙәрен 50-гә яҡын вирус тарата. Шуға ла сусҡа киҙеүен лаборатор диагностика ғына асыҡлай.

**9-сы уйҙырма. Сусҡа киҙеүенә анализдарҙы илдең бер лабораторияһында ғына тикшерәләр, шуға ла уларҙың һөҙөмтәһен бер аҙна көтөргә кәрәк.**

- 1 сентябргә тиклем анализдар махсуслашҡан учреждениеларҙа тикшерелә ине. Хәҙер сусҡа киҙеүен йоҡтороусылар һаны артыу сәбәпле, ил етәкселеге ҡулайлашҡан бөтә лабораторияларҙа тикшереүҙәр үткәрергә мөмкинлек бирҙе. Беҙҙең институт менән 600-гә яҡын медицина үҙәге хеҙмәттәшлек итә. Уларға мөрәжәғәт итеп, 2 көн эсендә тикшерелә алаһығыҙ.

**10-сы уйҙырма. Сир сусҡа киҙеүе тип аталғас, составында сусҡа ите булған продукттарҙы ашамау хәйерле.**

- Вирус сусҡа организмында барлыҡҡа килгәнлектән, ошо исемде йөрөтә. Йәғни ул сусҡа һәм кеше вирустары фрагменттары ҡушылыу һөҙөмтәһендә килеп сыға. Сусҡа организмы вирустың яңы варианттары өсөн инкубатор иҫәпләнә. Әммә уларҙың барыһы ла инфекциялы тип әйтеп булмай, беҙ һаман да йылытып эшкәртелеү үткән аҙыҡты ҡулланыуҙы дауам итәбеҙ, шуға ла аҙыҡ-түлек аша сир йоҡтороу мөмкин түгел.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ВАКЦИНА ӘҘЕРЛӘНӘ

**Ошо көндәрҙә Рәсәй киң матбуғат саралары Өфөлә "сусҡа киҙеүе"нә ҡаршы вакцина етештереү башланған, тигән хәбәр еткерҙе. Был ысынлап та шулаймы?**



- Беҙҙең предприятие "сусҡа киҙеүе"нән вакцина әҙерләп сығарыуға тулыһынса әҙер, - тип һөйләп китте "Микроген" фәнни-етештереү ойошмаһының "Иммунопрепарат" филиалы матбуғат хеҙмәткәре Гүзәл Йосопова. - Пандемик иммунобиологик препарат эшләү технологияһы бик оҙайлы һәм бер нисә этаптан тора. Әлеге ваҡытта вакцинаның тәжрибә сериялары дәүләт һынауҙары үтә. Яңы профилактик сараны ҙур күләмдә сығарыу ноябрь айҙарында башлана.

"Микроген" фәнни-етештереү ойошмаһы "Росздравнадзор"ҙан Өфөлә һәм Иркутскиҙа етештерелгән пандемик вакциналарҙы балаларҙа клиник тикшереү үткәрергә рөхсәт алған. Бындай ҡарар A/H1N1 киҙеүенә ҡаршы вакцинаны өлкәндәрҙә һынап, ыңғай һөҙөмтәләр алғандан һуң федераль контроль ведомствоһы тарафынан ҡабул ителгән. "Йоғошло ауырыуҙарҙы иммунопрофилактикалау тураһында"ғы федераль законға ярашлы, кешелә вакциналарҙың теләһә ниндәй һынауы ла, уға был турала мәғлүмәт еткерелеп һәм ризалығын иҫәпкә алып, үткәрелергә тейеш. Әгәр ҙә вакцина балаларға ҡарата ҡулланыла икән, уларҙың ата-әсәһе был һынауҙың маҡсаты һәм бурыстары, иммунизацияның файҙаһы һәм уның эҙемтәләре хаҡында белергә тейеш.

Гүзәл Йосопова билдәләүенсә, "сусҡа киҙеүе"нән вакцина тикшеренеүҙәре өлкәндәргә, шулай уҡ балаларға ҡарата ла Өфөлә үткәрелмәйәсәк. Уның ҡайҙа уҙғарыласағы әлегә билдәһеҙ.

- Әлеге ваҡытта республикала лаборатор рәүештә A/H1N1 киҙеүе вирусы менән ауырыусыларҙың ике осрағы раҫланды, - тип һөйләне "Роспотребнадзор"ҙың БР буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова. - "Сусҡа киҙеүе", нигеҙҙә, ситтән килтерелә, беҙҙең хеҙмәткәрҙәр аэропорттың контроль пунктында даими рәүештә бөтә авиапассажирҙарҙы тикшерә. Ҡағиҙә булараҡ, көн һайын кемде лә булһа, A/H1N1 киҙеүенә шик тотоп, 4-се һанлы ҡала инфекция дауаханаһына лаборатор тикшеренеүҙәргә оҙаталар. Сит илдән Өфө аша Силәбегә ҡайтып барыусыларҙы ла рейстан алып ҡалыу осрағы ҡуҙәтелде. Шуларҙың икеүһенең диагнозы раҫланды һәм беҙ уларҙы шундуҡ Силәбеләге коллегаларыбыҙға тапшырҙыҡ.

Мәктәптәр буйынса хәлдәр тыныс, - тип һүҙен дауам итә Нәсимә Күсемова. - Әлегә тиклем уҡыусылар араһында "сусҡа киҙеүе" менән ауырыусылар осрағы теркәлмәне. Шулай уҡ ОРВИ менән табибтарға мөрәжәғәт итеүселәр ҙә "сусҡа киҙеүе" вирусына лаборатор тикшереңеү үтеп тора, раҫланған диагноздар әлегә юҡ.

Шуны ла өҫтәп әйтергә кәрәк, "Иммунопрепарат" коллективы иммунобиологик һәм дауалау саралары етештереү, шулай уҡ вакциналар әҙерләү буйынса дәүләт заказын үтәү планын тотороҡло башҡарып килә. Халыҡты миҙгел киҙеүенә ҡаршы иммунизациялау өсөн дәүләт килешеүе буйынса "гриппол"ды ла ошо уҡ коллектив етештерҙе.

ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН КОТОЛОП БУЛА



## 19-сы һабаҡ: "Икенсе йөрәк", шул уҡ йүгереү, йәғни ҡан әйләнешен тәьмин итеүсе ысул, механизм...

Гәзиттең бынан алдағы һанында Ағиҙел ярында булған фәһемле һәм ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында һөйләгәйнем инде. Ҡатмарлы һәм сетерекле хәлгә тарып, йылғаның теге ярында плавкиҙа ғына көйө, юғалып ҡалмайынса, ярты ҡаланы йүгереп үтеүсе һәм беҙгә кире әйләнеп килеүсе дуҫыбыҙ тураһында...

Ул ошондай ҡотолоуы мөмкин булмаҫтай күренгән ауыр хәлдән тик йүгереү юлы менән генә сыға алған. Ҡыҙыҡ бит: ауыр һәм ҡатмарлы хәлдән йүгереп сығыу юлы!

Йүгереү - сығыу - юл!

Күҙегеҙҙе йомоғоҙ ҙа, әкрен генә ошо һүҙҙәрҙе бер-бер артлы ҡабатлағыҙ. Йүгереү - сығыу - юл! Ябай һүҙ итеп кенә түгел, уларҙың мәғәнәһен булмышығыҙға күсереп, кисереп әйтегеҙ. Шул һүҙҙәрҙең образына инегеҙ. Һиҙәһегеҙме, башығыҙ бер яҡҡа тартылып, хәрәкәт барлыҡҡа килә. Хәрәкәт нисек тыуа? Мейе эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә, уның фарманы буйынса. Шулай булғас: "Мине аяҡтарым ҡотҡарҙы", - тигән һүҙ бөтөнләй үк дөрөҫ түгелме? Кешене һәр саҡ мейеһе ҡотҡара. Шулай уҡ төн уртаһында яңғыҙыңа бер армада хулигандар бәйләнгән саҡта ла йүгереп ҡотолоу ысулы иң еңеле һанала. Шулай бит? Тимәк, баш мейеһе тәнде хәрәкәткә килтерә торған ағзаларға сигнал бирә алғас, бындай элемтә каналы булғас, кире бәйләнеш тә бар.

Күҙ алдына килтереү еңелерәк булһын өсөн автомобилде тоҡандырыу механизмын алайыҡ. Унда стартер аккумуляторҙан көс алып, моторҙы тоҡандыра. Мотор эшләп китә лә, генератор аша аккумуляторға көс бирә башлай. Аккумуляторҙың клеммаларын ысҡындырһаң, двигатель ни эшләй? Эйе, тап өҫтөнә баҫтығыҙ: ул һаман да эшләүен дауам итә.

Хәҙер инде ошо схема буйынса "баш мейеһе - сигнал - хәрәкәт" бәйләнештәрен тикшереп ҡарайыҡ. Баш мейеһе хәрәкәтте барлыҡҡа килтерә торған ағзаларға нервылар аша сигнал биргәс, хәрәкәт барлыҡҡа килә. Йөрәк был осраҡта карбюратор ролен башҡара, йәғни көсөргәнешле хәрәкәт өсөн өҫтәмә ҡан бүлеп бирә. Тәндең әүҙем өлөштәре хәрәкәткә килгәс, йөрәктең эшләүе, ҡан әйләнеше хәрәкәттең режимы менән бер ритмға күскәс, нимә күҙәтәбеҙ? Дөрөҫ, баяғы аккумуляторға двигатель кире йүнәлештә көс биргән кеүек, аяҡ-ҡулдарыңдың, тән ағзаларыңдың хәрәкәте баш мейеһе эшмәкәрлегенә, йөрәктең эшләүенә булышлыҡ итә башлай. Йәғни, хәрәкәт йөрәк эшләүенә күсә. Тимәк, йүгереү йөрәктең функцияһын үтәргә тотона. Тимәк, ЙҮГЕРЕҮ - УЛ ЙӨРӘК! Ул - икенсе йөрәк. Йүгергән саҡта йөрәгең ял итә, көсөргәнеше кәмей. Һин ике сәғәт буйы йүгерһәң, йөрәгеңә һәм баш мейеңә ике сәғәтлек ял бирәһең, көнө буйына йүгерһәң - йөрәгең ял көнөн үткәрә, ғүмерең буйына йүгерһәң...

Хөрмәтле дуҫтарым, ошо юлдарҙы уҡығас та, үҙегеҙҙең икенсе йөрәгегеҙҙе тоҡандырырға ашығығыҙ. Әле һуң түгел. Замандың стресҡа һәм депрессияға килтергән сәбәп-хәлдәре бихисап, шул саҡта ике йөрәк менән йәшәһәгеҙ, барлыҡ ауырлыҡты икеһенә бүлеп һалһағыҙ - бирешмәҫһегеҙ.

XX быуаттың икенсе яртыһында донъяның иң көслө кешеһе һаналған Василий Алексеев йөрәк өйәнәге менән тыуып, 11-12 йәшендә бөтөнләй атлай алмаҫлыҡ хәлдә ҡала. Уны яйлап хәрәкәт итә башлау, йүгереү, йәғни икенсе йөрәген эшләтеп ебәреү ҡотҡара. Әгәр ҙә ул йүгерә башламаһа, беҙ белгән ауыр атлетика буйынса донъя чемпионы Василий Алексеев түгел, Вася ғына булып, егерме йәше лә тулмайынса, донъя ҡуйыр ине. Донъя тарихында бындай миҫалдар бихисап.

Мин физиолог та, медик та, психолог та, инженер ҙа, акушер-гинеколог та түгел, әммә йүгереүҙең үҙемә килтергән файҙалы тәьҫирен бөтөн тулылығында татыған кеше. Шулай булғас, ҡайһы бер терминдар мәсьәләһендә белгестәр мине ғәфү итһен: мин йүгереүҙең икенсе йөрәк икәнлегенә инандым.

Эскелек ҡоллоғонан да тик йүгереү юлы менән генә ҡотола алдым. Йүгергән саҡта һине, беренсенән, элекке шешәләштәрең баҫтырып етә алмай. Шешәләштәрең генә булһа, бер асыу - һине киренән эсә башларға мәжбүр итеүсе сәбәп-һылтауҙар ҙа, шулай уҡ, буш шешә кеүек, дыңғырлап ятып ҡала. Нисекме? Икенсенән, йүгергән ваҡытта һинең:

1. Уйҙарың һәм бар ғәмәлең тик ошо йүгереүгә генә бәйле сарыф ителә. Йәғни, йүгереү маршрутын билдәләйһең, һәр саҡ алға ҡарайһың, ҡаршы килгән кешеләрҙе урап үтәһең, транспортҡа юл бирәһең, аяғыңды дөрөҫ итеп баҫырға тырышаһың, дөрөҫ тын алыуыңды контролдә тотаһың, хәлеңде самалайһың һ.б.

2. Барлыҡ энергияң, көсөң, фекерең, хисең, ваҡытың тик йүгереүгә генә тотонола. Йүгереп китеп барғанда ашап-эсеп, ял итеп, йоҡлап, китап уҡып, шахмат уйнап, ҡурай тартып, гармун быҫҡылдатып, гер күтәреп, йырлап, кемделер яратып, яратылып булмай.

3. Йүгереп барғанда тормошоңдағы барлыҡ ауырлыҡтарың, ҡайғыларың, хәсрәттәрең, хафаларың икенсе планға күсә. Беренсе планда - йүгереү процесы. Әгәр ҙә тегеләрен беренсе урынға ҡуйһаң, йүгереүеңдән туҡталып ҡалырға тейешһең. Йүгерә башлаһаң, былары икенсе планға күсә. Тимәк, ҡайғы-хәсрәттәреңдән йүгереп онотолоп була.

4. Йүгереп барғанда башҡа кеше хаҡында, ғөмүмән, насар уйҙа, фекерҙә була алмайһың. Насар уй кешене шундуҡ арыта, быуыныңа төшә, аяғыңды атлауға күсерә.

Ышанмаһағыҙ, йүгереп ҡарағыҙ ҙа, эстән генә кемделер иң әшәке һүҙҙәр менән һүгегеҙ әле. Шундуҡ улар аяғығыҙға "тышау" булып һалынасаҡ, таш булып бауланасаҡ. Йүгергәндә насар уй уйлап булмай, насар уй уйлаһаң, йүгереп булмай. Шул уҡ ваҡытта, ҡоллоҡтан ысҡынғас та, йүгереүеңде туҡтатһаң, теге "кол биләүсе" һине үҙе ҡыуып етә лә, эҙләп таба ла, тағы ла нығыраҡ итеп аяҡ-ҡулыңды сырмап бығаулай. Ул сағында инде унан ысҡыныуы, ай-һай, ауырлаша. Аңлайһығыҙҙыр, ни хаҡында һөйләгәнемде? Эйе, бер мәртәбә туҡталып, оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөп, тағы ысҡынған кешенең хәле, "Һыйыр тулаһа, аттан да яман була" тигәндән дә ҡатмарлыға әүерелә.

Ҡайғы килгәндә, оҙаҡ ваҡыт күңел тыныслығы таба алмағандарҙы элек тау битләүе буйлап мәжбүр итеп йүгерткәндәр. Ә ни өсөн шулай иткәндәр? Йүгереүҙең ҡайғыны онотторор сере нимәгә ҡайтып ҡала? Был һорауға беҙ яуапты юғарылағы 1, 2, 3, 4 осраҡтарында бирҙек, буғай. Уларға 5-се осраҡты ла өҫтәргә булалыр. Хәле бөткәнсе, сарсауҙан үтеп асыҡҡансы, асығыуҙан үтеп сарсағансы, арып-арманһыҙ булғансы, ҡоларлыҡ ҡына хәле ҡалғансы йүгергән кешенең ҡайғырырлыҡ хәле ҡаламы икән? Тағы ла бер һорау: ә ни өсөн ҡайғыға тарыған кешене фәҡәт тау битләүе буйлап тау уратаһына йүгерткәндәр һуң? Ә ниңә туп-тура ға түгел?

Был турала алдағы һандарҙа һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Һайлау көсөн аҡыллы файҙалан

Әлеге ваҡытта һин кем һәм кеше булараҡ нимәгә өлгәшкәнһең - былар барыһы ла үткән йылдарыңда һин тормошҡа ашырған һайлау мөмкинлектәреңең дөйөм һөҙөмтәһе ул. Һайлау хоҡуғы - ул үҫеш көсө, ниндәй булырға теләһәң, үҙеңде шундай итеп күреү мөмкинлеге. Һин яһаған һәр аҙым - ул тормош йортоңа һалынған кирбес. Һәр ғәмәл, һәр һүҙ, һәр ҡарар ҙа һинең булмышыңдың бер өлөшөнә әүерелә бара. Үҙең йәшәгән донъяға ниндәй күҙҙәр менән ҡарайһың һәм уға нисек тәьҫир итәһең - ул да һинең теге йәки был һайлау һөҙөмтәһе булып тора. Шулай булғас, һайлау ниндәйҙер мәғәнәлә һинең донъяңды тыуҙыра булып сыға, сөнки һин күргән донъя - ул һин йәшәгән донъя бит.

Ҡайһы бер осраҡтарҙа һайлау асыҡтан-асыҡ була. Беҙ ниндәй кейем кейергә, нимә ашарға, кем менән дуҫлашырға кәрәклеген үҙебеҙ һайлайбыҙ. Ҡайһы бер ҡарарҙар еңел, ҡайһылары ауыр була, әммә һәр ваҡыт уны һин үҙең һайлайһың. Ҡайһы саҡта бүтәндәр беҙгә үҙ ҡарарын көсләп таҡҡан кеүек тойола, әммә, ысынында иһә, улар ҙа беҙҙең һайлау һөҙөмтәһе. Мәҫәлән, беҙ мәктәпкә йәки эшкә йөрөргә мәжбүрбеҙ, тип әйтә алабыҙ. Ысынлап та, ҡайһы бер ҡарарҙарҙы ҡабул итеүгә кемдер дәртләндерә йәки мәжбүр итеүе мөмкин, шулай ҙа һуңғы аҙымды беҙ үҙебеҙ эшләйбеҙ бит.

Алда торған теге йәки был мәсьәләгә ҡарата бөтөнләй бер ниндәй ҙә һайлау мөмкинлеге ҡуйылмаған саҡ бик һирәк була, әммә шул саҡта ла һинең "эшләргә тейеш" йәки "эшләй алмай" торған әйбергә яуап биреүҙе һайлау мөмкинлегең була. Беҙҙең бер ниндәй ҙә һайлау мөмкинлегебеҙ юҡ йәки яҙмыш боролоштары алдында көсһөҙбөҙ, тип иҫәпләйбеҙ икән, шуның менән бергә үҙебеҙҙәге иң мөһим көстө - һайлау хоҡуғын инҡар итәбеҙ. "Мин булдыра алмайым...", "Мин тейеш...", "Мин бурыслы..." - тип әйткән саҡта, күҙ алдыңа ла килтермәгән мөмкинлектәрең барлығын белеп ҡуй.

Ҡайһы саҡта кешеләр: "Мин үҙ тойғоларым менән бер нәмә лә эшләй алмайым", - тип әйтә. Әммә һинең һәр ваҡыт үҙ тойғоларың менән яуап биреү мөмкинлегең бар. Мәҫәлән, рәхәтләнеп йылы түшәктә аунағы килгән саҡта, иртүк тороп, мәктәпкә барырға кәрәк һәм һинең шуның өсөн асыуың ҡабара, ти. Был асыу тойғоһо менән нимә эшләргә мөмкин? Һинең алдыңда әллә күмпе һайлау мөмкинлеге бар. Һин уны асыуыңды килтергән сәбәпкә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмаған башҡа берәй нәмәгә йүнәлтә алаһың йәки еңелсә ризаһыҙлыҡҡа әүерелдереп, уны баҫа алаһың. Шулай уҡ йүгереп килеп, йәки спорт залына барып, боксер грушаһына һуҡҡылап алып, был асыуҙы сығара алаһың, был турала дуҫың менән һөйләшә алаһың, тағы ла үҙеңдең ярһыуыңа ҡолаҡ һала алаһың, һәм башҡалар.

Әгәр ҙә алдыңда үҙеңә оҡшамаған әйберҙе башҡарыу бурысы торһа, үҙеңдән: "Быны башҡарыуҙың миңә күберәк файҙа килтерә алырҙай тағы ла ниндәй ысулы бар? Быны ниндәй ваҡытта эшләргә тейеш булам? Минең ниндәй альтернативаларым бар?" - тип һорай алаһың. Ысынбарлыҡтағы һайлай алыу көсөнә төшөнгәс, ни тиклем реаль мөмкинлектәрең күп булыуына үҙең дә аптырарһың. Ысынында һин күҙ алдына килтергәнгә ҡарағанда ла ҙурыраҡ власҡа эйәһең. Һин тормошоңдо, хатта булмышыңды үҙгәртә алырҙай көскә эйәһең, һәм былар барыһы ла һайлау көсө һөҙөмтәһе. Был көстө аҡыллы итеп ҡуллана бел!

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӨХӘББӘТ АЛДЫНДА ТЕҘЛӘНЕРМЕН...

## йәки "Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" конкурсы тураһында

**Баймаҡ ҡалаһында уҙғарылған "Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" йәштәр конкурсы был юлы ла тамаша ҡылыусыларҙы уйҙарға һалды, йөрәккә матур ял бүләк итте, шатлыҡ-ҡыуаныстарға төрөндөрҙө. Был сара Баймаҡ район китапханаһының изге уй-ниәте булып, йыл һайын уҙғарыла килә һәм йыл һайын мин башҡорт йәштәренең ни тиклем дәртле, матур, сая, даланлы булыуына һоҡланам. Береһенән-береһе тапҡыр, аҡыллы, һылыу ҡыҙ һәм егеттәргә ҡарап, кемдең башҡорт халҡының киләсәге юҡ, тип әйтергә теле әйләнер икән?**




Бына сәхнәлә Мостай Кәрим әҫәрҙәре геройҙары. Конкурстың тәүге шарты йәштәрҙе был әҙиптең күп кенә әҫәрҙәрен уҡып сығырға, мөхәббәт тураһында ниндәй өҙөктө һайлап алыу буйынса бәхәскә инергә мәжбүр иткән. Ҡыҙҙар һәм егеттәр әйтеүенсә, ошо изге тойғо тураһында ябай, әммә шул тиклем дөрөҫ итеп әйтелгән һүҙҙәр уларҙың ҡарашын да үҙгәрткән. "Ошоға тиклем мөхәббәт, ғашиҡ булыу кеүек тойғолар, нисектер, әҙәм балаһы өсөн артыҡ, карьера эшләргә ҡамасаулаған нәмәләр тип уйлай инем. Мостай Кәрим миңә мөхәббәт кемделер генә яратыу түгел икәнлеген, тәбиғәтте, халҡыңды, үткәнеңде һәм киләсәгеңде яратырға өйрәтте", - тине конкурсанттар.

Эйе, ҡыҙҙар һәм егеттәр мөхәббәттең йәшенеп үбешеү генә түгел, ә икенсе кеше өсөн оло яуаплылыҡ алыу икәнлеген бик яҡшы аңлағандыр, тип уйлайым. Мостай Кәримдең:

*Әммә әжәл ҡаршыһында*
*Теҙләнергә самам юҡ.*
*Шул уҡ мөхәббәт алдында*
*Теҙләнермен - сарам юҡ,* - тигән һүҙҙәре уларҙың күңелендә мәңге һаҡланһын ине.

Конкурстың икенсе шарты буйынса, ҡыҙҙар һәм егеттәр Мостай Кәримдең шиғырҙарын яттан һөйләргә тейеш ине. Тамашасыларҙың тәрән фәлсәфәле, уйҙарға һалған шиғырҙарҙы йотлоғоп тыңлауы уҡыусыларҙың яҡшы әҙерләнгәненә юғары баһа булғандыр.

Мостай Кәримдең Оло инәй образы беҙҙең күңелдәрҙә шәфҡәтлелектең, сабырлыҡтың, тәрән аҡылдың өлгөһө булып ҡалды. Яҙыусының әҫәре менән танышҡан һәр кеше әсәһенең, өләсәһенең нәҡ шундай булыуын теләйҙер. "Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" конкурсының төп шарттарының береһе - Оло инәйҙең һорауҙарына тапҡыр яуап ҡайтарыу ине. Оло инәй булып 1-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғәлиә Әҙеһәм ҡыҙы Сирбаева сығыш яһаны. "Бәхетле булыу өсөн нимә кәрәк?" тигән һорауға конкурста ҡатнашыусы Р. Моратов: "Донъялағы бар балаларҙың туҡ һәм шат булыуы", Г. Юнысова: "Үҙеңдең һәм яҡындарыңдың һау-сәләмәтлеге, белем алыу мөмкинлеге", - тип яуап ҡайтарҙы. Намыҫ төшөнсәһен Ю. Ярбулатова: "Ата-әсәйеңде ҡәҙерләй белеү", - тип аңлаһа, Р. Дәүләтшин иртәнсәк мәктәпкә һуңламау ҙа кешенең намыҫына бәйле икәнлеген белдерҙе. Мостай Кәримдең ни өсөн тормош көтөргә мотлаҡ мөхәббәтте ҡушып алырға саҡырыуын Л.Аралбаева бар нәмә ошо изге тойғонан яралыуын, бигерәк тә әсә мөхәббәтенең көс биреүе, ә Ә. Юнысов һәр әҙәм балаһының ата-әсәһенән алған мөхәббәтен дауам итеүе, уны быуындан-быуынға тапшырып, милләтен һаҡлауы менән аңлатты. "М. Кәрим өс кешене - Оло инәһе, Твардовский һәм Мөхәмәтйәров Хәйҙе зыялы, үҙе өсөн үрнәк тип һанай. Һеҙҙең уйығыҙса, һәр кешенең кумиры булырға тейешме?" - тигән һорауға А. Байраҡаева һәм Й. Мәхийәнов: "Бөйөк кешеләрҙән үрнәк алып йәшәү беҙҙе рухи яҡтан байыта, яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ булырға өйрәтә. Тәү сиратта һәр кем ата-әсәһенән өлгө алып үҫә", - тип ололар уйланырлыҡ яуап бирҙе.

"Яҙыусы ни өсөн йылмайыуҙы бөйөк көс, тип иҫәпләгән?" - тигән һорауға Ҡ.Нуретдинова: "Йылмайған кешенән нур бөркөлә", ә И.Шәйәхмәтов: "Бәхетле кешеләр генә ихлас йылмая белә", - тип яуап бирҙе. Мостай ағай "Алама йәштәр ҡайҙан сыға?" - тигән һорауға: "Бишектән төшә", - тип яуап ҡайтара. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ҡыҙҙар һәм егеттәр ни өсөн насар юлдан китә?" -тигән һорау бирелде. Я.Зөбәйҙуллина һәм Т.Туйсин был һүҙҙәр менән килешеп бөтмәүен, һәр кем үҙ юлын үҙе һайлауын, барыһы ла унының ихтыяр көсөнә бәйле икәнлеген, шулай уҡ "Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" кеүек конкурстарҙа ҡатнашыусылар араһында алама йәштәрҙең булыуы мөмкин түгел икәнлеген белдерҙе. "Йәштәр тормош ҡорғас, ғаилә өсөн яуаплылыҡты кем үҙ өҫтөнә алырға тейеш?" тигән һорау яңғырағас, С.Бикбулатов һәм Г.Байрамғолова: "Әлбиттә, ир кеше. Ул ҡатынына һәм балаларына таяныс булырға, матди яҡтан тәьмин итергә бурыслы", - тип яуап ҡайтарҙы.

Кисәне йәмле итеп алып барыусы Ләйсән Ғәлина һәм Дилара Сәфәрғалина М.Кәрим ижады буйынса викторина ойошторғансы, жюри конкурсҡа һығымта яһаны. Гран-при лайыҡлы рәүештә Гөлиә Юнысова һәм Рифат Моратовҡа тапшырылды. Беренсе урынды Юлиә Ярбулова һәм Руслан Дәүләтшин, Зәлифә Ғибәҙуллина һәм Фәнзил Хәсәнов уртаҡлашты. Икенсе урын Гөлиә Байрамғолова һәм Салауат Бикбулатовҡа тапшырылды. Ҡалған ҡатнашыусылар ҙа район китапханаһы, йәштәр бүлеге, мәғариф бүлеге әҙерләгән иҫтәлекле бүләктәр менән бүләкләнде.

**Жюри ағзаларынан сара тураһындағы тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙарын һораныҡ:**

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА, район ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, Баймаҡ берләштерелгән китапханалар селтәре директоры:**

- Еңеүселәрҙе билдәләүе, баһалауы ауыр булды. Сөнки йәштәр бик ныҡ әҙерләнгән, тырышҡан. Мин уларҙың саялығына, матурлығына һоҡланып, ғашиҡ булып ҡараным. Бер әсәнең: "Рәхмәт инде һеҙгә. Компьютер артынан тормаған улыма китап тоттороп ҡуйҙығыҙ", - тигән һүҙҙәре минең өсөн иң ҙур рәхмәт һүҙҙәре булды.

**Әмир Сәйғәфәров, крайҙы өйрәнеүсе:**

- Бөгөнгө йәштәр, ә улар мәктәп уҡыусылары ғына, башҡаларҙы әйҙәргә, рухи яҡтан байытырға тейеш. Улар Аҡйондоҙ менән Аҡйегет исеменә лайыҡ булыу өсөн бәйгегә сыҡҡандар икән, тимәк, артабан да улар бар яҡшы башланғыста алда булырға бурыслы.

**Миҙхәт ХАЛФИН, йәштәр эштәре буйынса сектор рәйесе:**

- Был конкурс башҡорт теленең байрамы ла булып тора.Сөнки Мостай Кәримдең әҫәрҙәре донъя кимәлендә танылыу алды. Сарала бөгөн улар беҙҙең алда әҙер артистар булып сығыш яһаны.

**Зәйтүнә Рәсүлева, мәғариф бүлегенең профком рәйесе:**

- Бындай саралар һәр саҡ тулҡынланыу, ғорурланыу уята. Ниндәй матур, һоҡланғыс, талантлы алмаш үҫеп килә. Йәштәрҙе юҡҡа әрләйбеҙ икән, тигән уй килде әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" конкурсы йәштәрҙе әсә телендә аралашырға, үҙ телеңде яҡшыраҡ белергә лә ярҙам итә. Рус синыфында уҡыған уҡыусыларҙың тырышып-сәмләнеп башҡортса шиғыр һөйләүе ҡыуандырҙы. Юғиһә, беҙ башҡорт телен белмәгән милләттәштәребеҙҙе ситкә тибергә, кәмһетергә яратабыҙ. Әгәр әсә телендә һөйләшмәгән балаларҙы ошондай конкурстарға ҡатнашырға йәлеп итһәк, иманым камил, башҡорт телендә гәзит-журналдар алдырыусылар, китап уҡыусылар артасаҡ ҡына.**

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

### ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хозур тәбиғәтле Ғафури районының йәмле Еҙем буйҙарында урынлашҡан күркәм Юлыҡ ауылында тыуып үҫкән, әлеге көндә лә шунда ғүмер итеүсе өләсәйебеҙ **Зөһрә Әхмәтша ҡыҙы ҠУЖИНА**ның ошо көндәрҙә олуғ юбилейы - ҡәҙерлебеҙгә 80 йәш тула. Уны 6 балаға ғүмер биреүсе ғәзиз әсә лә, килен-кейәүҙәренә ҡарата мәрхәмәтле ҡәйнә лә, беҙгә - ейән-ейәнсәрҙәренә халҡыбыҙ мәҡәл-әйтемдәре аша тәрбиә һеңдергән изге өләсәй ҙә булараҡ ихтирам итәбеҙ, оло рәхмәт һүҙҙәрен еткерәбеҙ. Күңелең шулай һәр саҡ киң, атыр таңдарың аяҙ, килер көндәрең көләс булһын. Оҙон ғүмер, тән сихәтлеге, ныҡлы һаулыҡ биреһен Хоҙай, күңелеңдәге йән йылыңдың нуры һүнмәһен, һүрелмәһен, тирә-яғыңдағыларға аҡ нур булып яғылһын, беҙгә терәк булып, балаларыңа кәрәк булып, тағы ла бик күп йылдар йомғағын һүтергә насип итһен.

*Йәйҙәр, ҡыштар аша һикһәнеңә*
*Йылдар толпарында елгәнһең.*
*Изге йән дә, шәфҡәтле лә булып,*
*Был донъяға көҙөн килгәнһең.*
*Сәстәреңде һинең сал баҫһа ла,*
*Күңелең иркен, һаман йәш әле.*
*Йәнең тыныс, тәнең таҙа булһын,*
*Ҡыуаныс, шатлыҡ менән йәшә әле.*

**Иң изге теләктәр менән, барлыҡ балалары, яҡындары исеменән Өфөлә йәшәүсе ейәнсәре Эльвира, кейәүе Насир, ейәне Салауат, бүләләре Әлфиә һәм Руслан.**

x x x

Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында йәшәүсе **Юлиә Юлай ҡыҙы ИШТАНОВА**ны 30 йәшлек юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ныҡлы һаулыҡ, балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре, бүләр-бүләсәрҙәре, тыуар-тыуасарҙары шатлығына күмелеп, беҙҙе лә ҡыуандырып, оҙаҡ итеп йәшәүен теләйбеҙ!

Һин йәшәгән был донъяла беҙгә рәхәт, изге күңелең, яҡшылыҡтарың өсөн мең рәхмәт, Юлиә!

**Ҡотлау менән, ireң Морат, балаларың Ғайсар менән Азалия, Хәйбулла районында һәм Өфөлә йәшәүсе туғандарың.**

x x x



Өфө ҡалаһында йәшәүсе һөйөклө әсәйебеҙ **Рәмзиә Фәрит ҡыҙы ЗӘЙҘУЛЛИНА**ны 50 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлап, йөрәк түренән сыҡҡан иң матур, яҡты теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Киләсәк көндәрең өмөт менән тулы булып, ғүмер йомғағың шатлыҡ-һөйөнөстәргә генә тулып тәгәрәһен. Эшсәнлегең, сабырлығың, йомарт, алсаҡ һәм изге күңелле булыуың беҙҙең өсөн өлгө. Һин булғанға донъябыҙ йәмле, һинең фатихаң менән аҙымдарыбыҙ ышаныслы, бәхетебеҙ тулы, уйҙарыбыҙ яҡты. Хоҙай үҙеңде сәләмәтлектән, бәхеттән, күңел тыныслығынан айырмаһын, әсәй!

**Иң изге теләктәр менән, тормош иптәшең Рәшит, ҡыҙҙарың Алина, Регина.**

*Иғлан*

Утерянный студенческий билет №270077 выданный БГАУ 01.09.2007 года на имя Микеевой Натальи Михайловны считать недействительным.

x x x

Утерянные паспорт, тех. паспорт на автомобиль Форд Фокус и водительское удостоверение на имя Юлдыбаева Алика Ганиевича просим вернуть за вознаграждение. Тел.: 89373099184.

АФАРИН!

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ ҠАЙҘА БЕЙЕЙ?

## "Айбар" клубында...

**Хәтерегеҙҙә булһа, бынан ете йыл элек, 2002-2003 йылдарҙа, баш ҡалабыҙҙа башҡорт йәштәре өсөн "Айбар" клубы эшләй ине. Унда башҡорт йәштәре йыйылып күңел асты, танышты, аралашты, дуҫлашты. Ошо клуб бөтәһе 17 башҡорт ғаиләһе барлыҡҡа килеүгә лә этәргес булған. Тик ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында был клуб ябыла. Яңырак "Айбар" башҡорт йәштәре клубы үҙ ишектәрен ҡабаттан асты. Ни өсөн баш ҡалабыҙҙа башҡорт йәштәре клубын яңынан тергеҙеү мохтажлығы килеп тыуҙы? Был клубтың маҡсаты нимәнән ғибәрәт? Ошолар хаҡында "Айбар" башҡорт ижади йәштәр ассоциацияһы рәйесе, был клубты ойоштороусыларҙың береһе Алмас ҒАФАРОВ һөйләй:**

- Кистәрен студент ятаҡтары янынан үтеп барғанда йыш ҡына башҡорт йәштәренең үҙ-ара һөйләшкәне ҡолаҡҡа салынып ҡала: "Ҡайҙа барабыҙ?" "Әлләсе". Ысынлап та, Өфө ҡалаһында уҡып, йә эшләп йөрөүсе башҡорт йәштәренең нәҡ ял көндәрен күңелле итеп уҙғарыр, күңел асыр, танышыу урыны юҡ. Паркка сығалар, концерт, спектаклдәргә йөрөйҙәр, тиреһеҙ. Эйе, уныһы дөрөҫ. Ә шулай ҙа йәш күңел тағы ла ҡайҙалыр ашыға, күңеллерәк урын эҙләй, ҡыҙығыраҡ тамашалар көтә түгелме? Тап шулай. Ауылда йәштәр күн һайын дискотекаға сыға, күрше ауылдарға йөрөй, таңға тиклем усаҡ янында ултыра. Ҡалала улар шундай күңел асыу урындарына мохтаж. Тимәк, баш ҡалабыҙҙа улар талабына яуап бирерҙәй күңел асыу урындары, йәғни клубтар бик кәрәк. Ләкин әлегә Өфө ҡалаһында рухиәтебеҙгә тап килгән, беҙҙе ҡәнәғәтләндерерҙәй, йәштәребеҙҙе ышанып тапшырырҙай клубтар юҡ. Ә ҡала клубтарында әхлаҡһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек күҙәтелә һәм ҡала йәштәре араһында ауылдан килгән йәштәр үҙҙәрен насар тоя. Ауылда атаәсәһе ҡосағында, матур мөхиттә үҫкән бала ҡала дискотекаларына йөрөй башлаһа, үҙенең дә ҡала йәштәренә эйәргеһе, уларса ҡыланғыһы килә башлаясаҡ. Етмәһә, был клубтарҙың береһендә лә башҡорт музыкаһы яңғырамай. Ә һәр кем үҙ көйөнә, үҙ моңона мохтаж. Туған моңдар яҡынайта ла, күңелдәрҙе лә йылыта. Баш ҡалабыҙға яңы килгән йәштәр ҡайҙа барырға, кем менән аралашырға, тип аптырап ҡалмаҫҡа, уларҙы бында һәр ерҙә башҡорт мөхите ҡаршы алырға тейеш.

Был клуб, беренсенән, аралашыу, танышыу урыны булып тора. Икенсенән, унда йәштәр берләп, күңел асып ҡына ҡалмай, күңеллерәк булһын өсөн "Юлдаш" радиоһы, гәзит журналистары килеп, уларға төрлө файҙалы конкурстар, уйындар уҙғарасаҡ. Йәш йырсыларҙың тере тауыш менән йырлауын йәштәр әле үк түҙемһеҙләнеп көтә. Элек ауылдарҙа башҡорт йәштәре кис уйынға сыҡҡанда "Ҡайыш һуғыу", "Үгеҙ йөҙөк" кеүек уйындар уйнаған. Ә ниңә беҙгә лә был уйындарҙы уйнамаҫҡа? Минеңсә, йәштәр милли уйындарыбыҙҙы бик яратып ҡабул итер ине.

Башҡорт клубы, башҡорт дискотекаһы тәртип яғынан да айырылып торорға тейеш. Бөгөнгө көндә йәмғиәтебеҙҙә төп бәләләрҙең береһе - эскелек. Үкенескә күрә, беҙҙең йәштәр араһында ла ошо афәткә тарыусылар бар. Кешегә "Эсмә", тип әйтеү менән генә ул барыбер туҡтамаясаҡ. Шуға күрә, беҙ клубта был әйһәттән аңлатыу эштәре лә алып барасаҡбыҙ.

Беҙҙең төп маҡсатыбыҙ: ата-бабаларыбыҙ беҙгә аманат итеп ҡалдырған, ошо ҡиммәттәр өсөн йәнен-тәнен аямай көрәшкән тарихыбыҙҙы, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, йәш быуынға еткереү. Был өс төшөнсә шул тиклем бер-береһенә бәйле: береһен онотһаҡ, икенсеһе юғалырға әҙер генә тора. Халҡыбыҙҙың киләсәге бөгөнгө йәштәр ҡулында. Уларҙы беҙ беренсе сиратта мәҙәниәтле, тәүфиҡлы итеп тәрбиәләргә бурыслыбыҙ. Бының өсөн төрлө юлдар бар. Клубҡа йөрөргә яратыусылар, музыканан айырыла алмағандар өсөн "Айбар" клубы төп тәрбиә үҙәктәренең береһенә әүерелер, тип ышанам.

Милләтебеҙҙә тағы ла бик борсоулы хәл күҙәтелә: ҡыҙҙарыбыҙҙың сит милләткә кейәүгә сығыуы һәм егеттәребеҙҙең сит милләт ҡыҙына өйләнеүе йышайҙы. Әлегә тиклем беҙҙең милләттәштең ситтән кәләш алып, йә кейәүгә сығып, башҡорт өсөн бала үҫтергәне юҡ. Был бик аянослы хәл. Шуға күрә, "Айбар" клубы йәштәрҙең ҡауышыуына сәбәп булһа, бик яҡшы булыр ине.

Тәүге уҙғарылған саранан бик ҡәнәғәт ҡалдыҡ. Дискотека ваҡытында шуны күҙәтеп ултырҙым: үҙ мөхитендә, үҙ кешеләре янында булғанға күрә, берәү ҙә бер кемде кәмһетмәне, һәр кем үҙен иркен тотто, рәхәтләнеп аралашты, үҙ көйҙәренә туйғансы бейене.

Ҡуптәрҙән, ни өсөн төндә уҙғараһығыҙ, был, киреһенсә, йәштәрҙе ҡотортоу, уларҙы әхлаҡһыҙлыҡҡа этәреү булмаймы, тигән һорау ишетергә тура килде. Йәшлек - дәртле саҡ, йоҡо килмәй торған саҡ, күңел ҡайҙалыр талпына, йөрәк ашҡына. Бындай клубтар булмаһа ла, йәштәр барыбер күңел асыр урынын табыр ине: ҡала клубтарына китер, төнгө урамда йөрөр, төнгөләккә фатирҙа ҡалырҙар ине. Беҙ унда уларҙың нисек күңел асҡанын белмәйбеҙ бит. Улар янында контроль булмағас, уҙҙәре теләгәнсә күңел асасаҡ. Был, киреһенсә, насар күренеш. Ә бында, исмаһам, башҡорт мөхите, башҡорт йәштәре, эсеү һәм тартыу ҡаты тыйыла, контроль дә бар. Йәштәребеҙҙе ҡайҙалыр ситкә ебәргәнсе, үҙ яныбыҙға йыйһаҡ, күпкә яҡшыраҡ бит.

Әле был беҙҙең тәүге аҙымыбыҙ, тиһәк тә була, артабан ныҡлы аяҡҡа баҫып эшләргә әҙһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күңелдәре ашҡынғандар, йөрәктәре талпынғандар, йәшлек дәрте һүнмәгәндәр "Айбар" клубына, Конгресс-холға рәхим итегеҙ! Үҙ көйҙәрегеҙ, үҙ моңдарығыҙға бейеп, милли уйындарығыҙҙы уйнап, рәхәтләнеп күңел асығыҙ! Милләттәштәрҙе бергә туплаған, берләштергән, күңелдәргә рух өҫтәгән "Айбар" клубы үҙ эшен уңышлы ғына дауам итһен!**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## ҺАЛМАУЫР - БАШҠОРТ БУМЕРАНГЫ...

**Күбәләк-тиләүҙәр әсәләренең, өләсәйҙәренең һәм әзәйҙәренең лөғәтендә осраған үҙенсәлекле һүҙҙәрҙе килтереүҙе, уларҙың мәғәнәһен аңлатыуҙы дауам итәм:**

**Дығырмаҡ** - малайҙар уйынындағы "яза". Бура йәки себен һуҡҡанда берәй малай (көтөүсе) уйындан ялҡып, ҡарыша башлаһа, уны дығырмаҡҡа һалалар. Бының өсөн таяҡтарҙы параллель һалып, малайҙы арҡаһына яткыралар. Икенсе малай уның өҫтөнә ултыра. Шунан һуң ҡарышыусының ике аяҡ-ҡулынан тотоп, тегеләй-былай дығырҙаталар. Арҡаһы ярайһы уҡ ышҡылғандан һуң, унан: "Бағынаңмы?" - тип һорайҙар. "Бағынам, бағынам", - тиһә, уны янынан уйынға алалар.

**Бағыныу** - башҡаларҙың ихтыярына буйһоноу.

**Шәйе** - хәтлем, тиклем. "Унын шәйе генә беләм инде", - тиҙәр.

**Тәләк итеү, тәләкләү** - төрттөрөп, мәрәкәләп, шаяртып әйтеү, йәки йырлау.

**Тәмеү** - сәпкә уҡ атыу йәки таш, таяҡ бәреү.

**Һалмауыр** - башҡорт бумерангы, кәкере таяҡ. Уны һуйырға йә ҡорға һалмауырҙайҙар.

**Баҙау** -хәлһеҙләнеү, арыу. Учалы районы Муса ауылынан алыҫ түгел ерҙә - Уралда Баҙай ташы бар. Легенда буйынса шул ҡая аҫтында бер ҡарт шүрәлене баҙатып еңгән.

**Ҡарлыған** - Ирәмәлгә яҡын ауылдарҙа ҡара көртмәлене шулай атайҙар.

**Ҡәнде** - нәк. Ҡәнде үҙе - нәк үҙе.

**Көнйылыткыс** - еңгәсәй, ҡояш апай.

**Быжмырҙау** - берәй нәмә эшләгәндә яй ҡыбырҙау, ваҡытты һуҙыу. Ундай кешене быжмыр, тиҙәр.

**Батыр ИҪӘНСУРИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЛА ТӘРТИПЛЕ БУЛҺЫН ӨСӨН...

## яҡшы тәртип өлгөһө кәрәк

Тәүге ауырлыҡ тыуыу менән Әҙәм бар яуаплылыҡты ҡыҙ-ҡатын елкәһенә һалған.

**(Нэнси Астор).**

Кешеләр яҡшыға һәм насарға бүленә. Яҡшы кеше яҡшыраҡ йоҡлай, ә насарҙар йоҡламаған саҡта күберәк ҡәнәғәтләнеү ала.

**(Вуди Ален).**

Буйҙаҡтар хан кеүек йәшәй һәм эт кеүек донъя ҡуя; өйләнгәндәр эт кеүек йәшәй, уның ҡарауы хан кеүек донъя ҡуя.

**(Жан Ануй).**

Берәүҙәр мәңге йәшәрҙәй булып, байлыҡ туплай, икенселәр иртәгә донъя ҡуйырҙай булып бар булғанын туҙҙыра.

**(Аристотель).**

Бөгөнгө балалар өсөн яҡшы тәртипкә өйрәнеүҙән дә ауырыраҡ бурыс юҡ, сөнки тирә-яҡта яҡшы тәртип өлгөһө бирерҙәй берәү ҙә юҡ.

**(Фред Астер).**

Ныҡышмалы рәүештә бәхетле булырға ынтылмаһалар, ҡыҙ-ҡатындар ҡалай һөйкөмлө булыр ине.

**(Марсель Ашар).**

Өйләнеүҙең берҙән-бер яҡшы яғы шул: ул дуҫтарыңдан арындыра.

**(Байрон).**

Утыҙҙы үткән ҡыҙ-ҡатын сәскә атыу осорон кисерә, әммә утыҙҙы үткән ир-егет тәүге ҡартлығын кисереү сәбәпле, быны шәйләмәй.

**(Жан Поль Бельмондо).**

Яҡынын бысраҡтан тартып сығарырға теләгән кеше быны атҡарыр өсөн тәүҙә үҙе лә бысраҡҡа төшөргә тейеш...

**(Исраэль Бешт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Әбүғәлисинаға йоҡоһоҙлоҡтан интеккән бер кеше килгән һәм уны был сирҙән дауалауын үтенгән. Табип ауырыуға китап һонған һәм:" Кисен йоҡларға ятҡас, бына ошо китаптың бер генә юлын, бер генә битен, бер генә бүлеген дә ҡалдырмай, уҡып сыҡ", - тигән. "Ә мин күпме ваҡыттан һуң йоҡлап китәсәкмен һуң?" - тип һораған ауырыу. "Күҙ алдыма ла килтерә алмайым, - тигән табип. - Ләкин шуны беләм: күпме генә ваҡыт йоҡлай алмай ятһаң да, ул мәлең һинең әрәмгә үтмәйәсәк..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:** **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4679